*✓ Диңгеҙҙәргә тиңләмәйем - тәрәнһең һин,*
*Айға-көнгә тиңләмәйем - гүзәлһең һин,*
*Ҡаяларға тиңләмәйем - бөйөкһөң һин,*
*Эй, илһамлы, эй, хөрмәтле башҡорт теле!*
**Зәйнәп БИИШЕВА.**

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

28 ИЮЛЬ - 3 АВГУСТ
(МАЙАЙ - УРАҒАЙ)
2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№30 (500)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Быуат ваҡиғаһындай...**
изге ғәмәл булыр



5

**Ял иткәндә лә...**
тыуған мөхитеңдә бул икән



6,9

**Суҡындырыу сәйәсәтен...**
башҡорттар ҡабул итмәгән



7

**Илһөйәрлектәң...**
күңелдә булыуы шарт



8-9

14 ТВ-программа

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Гәзитебеҙҙең 500-сө һанын ҡулығыҙға алаһығыҙ. Һеҙҙең тормошта ниндәйҙер әһәмиәткә эйәме "Киске Өфө"?

***Рәшит ШӘКҮР, яҙыусы, Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты профессоры:*** Тормошобоҙға электрон мәғлүмәт саралары көндән-көн нығыраҡ үтеп инеүгә ҡарамаҫтан, баҫма матбуғат - гәзит-журналдар ҙа бик күп бөгөн. Үҙәк гәзит һәм журналдар, ирекле баҫмалар тиһеңме - теләгәнеңде һайла. Шул уҡ ваҡытта тыуған телебеҙҙә нәшер ителеүсе баҫмалар ҙа байтаҡ ҡына һәм уларҙың һәр береһенең ҡабатланмаҫ үҙ йөҙө бар. Уларҙы нисек уҡымайһың инде! "Литературная газета"-ны электән уҡыйым, "Башҡортостан" үҙебеҙҙең төп гәзит,"Йәшлек"тән дә айырылып булмай. "Республика Башҡортостан" гәзите лә ҡыҙыҡһындыра. Бына шулай, өйгә алдырып уҡыған гәзит-журналдарҙың һаны байтаҡ булып китә.

Ләкин шулар араһында минең өсөн даими уҡый торған гәзитемә әүерелгән бер баҫма бар, ул - "Киске Өфө". Уҡый-уҡый, ҡайһы саҡ гәжәпләнеп тә ҡуям: нисек итеп үҙенә генә хас юлын, стилен тапҡан ул? Төп йүнәлеше яғынан да бик үҙенсәлекле бит ул. Бер һүҙ менән әйткәндә, "Киске Өфө" - бик аҡыллы гәзит. Ул халҡыбыҙҙың аңын күтәрә, рухын байыта, тәрбиәләй, уйландыра, фәһем бирә - шул яғы менән бик тә әһәмиәтле, заманса баҫма ул. "Киске Өфө" милләттәштәребеҙ араһында тағы ла киңерәк таралыу алһын, тағы ла уҡымлыраҡ булһын, тигән теләктәмен.

Бер тәкдимем дә бар: гәзит бөгөнгө әҙәбиәт үҫешенә, яҙыусылар ижадына яңысараҡ ҡараш ташлап, ошо темаға ла урын бирһә ине, тием. Яҙыусылар ижадына байҡау яһау, уларҙың яңы сыҡҡан китаптары менән уҡыусыны даими таныштырып барыу ҡыҙыҡ булыр ине. Бигерәк тә әҙәбиәт үҫешендә ваҡиға булырҙай әҫәрҙәр хаҡында һүҙ алып барылырға тейеш. Дөрөҫ, бының өсөн махсус әҙәби баҫмалар бар барлыҡҡа, шулай ҙа "Киске Өфө"нөң яңылыҡтарҙан ҡурҡмай, әленән-әле яңы рубрикалар уйлап сығарып тороусы баҫма икәнен иҫәпкә алғанда, ул был мәсьәләне лә, үҙ стиле һәм тематикаһына тоғролоҡ һаҡлап, үҙ йүнәлеше сиктәрендә яҡтырта алыр ине.

**(Дауамы 2-се биттә).**



БАШ ЙОРТТА...



# ЮЛ ЙӨРӨҮҘӘР... михнәт булыуҙан туҡтамай

**Театр һәм концерттан, ҡунаҡтан йә башҡа төрлө йомоштар менән йөрөп, өйөгөҙгә һирәклән булһа ла һуңлап ҡайтырға тура килгәне бармы? Улайһа, иманым камил, һеҙ берәй 30-40 минутлап ҡына туҡталышта транспорт көтөп тә торғанығыҙ барҙыр, моғайын.**

Киске сәғәт 8 -9-ҙан һуң ҡала муниципаль транспорт төрҙәре шып туҡтай, уңайлы һәм һыйҙырышлы НефАЗ-дарҙы һәм троллейбустарҙы был сәғәттәрҙә күҙҙәренде талдырып көтмәһәң дә була. Улар урынына, бәләкәй булһалар ҙа, аҡсаға аппетиттары ҙур газелдәр әүҙемләшә төшә. Һис юғында, был да һәйбәт тә бит, тик унда күп кеше ултыра алмайынса тороп ҡала, ә ултырғандарҙың яртыһы, түшәм тәпәш булғанлыҡтан, ыҙрҡа бөгәләп баҫып барырға мәжбүр. Һәм, ғөмүмән, Өфө урамдарын һуңғы ваҡыт газель тибындағы тығын, тынсыу салонлы ошо килбәтһеҙ микроавтобустар баҫып ала бара. Пассажирҙар өсөн уңайлы, киң салонлы булһалар, ни әйтер инең дә бит, ә былар менән эшкә килеп етеүгә, үҙенде кәмендә саунала булып сыҡҡандай хис итәһең йә булмаһа, ишекте ҡаплап өйөлөшкән пассажирҙарҙы йырып сыға алмайынса, туҡталышыңды үтеп китеүең дә ихтимал. Ни тиһәң дә, үҙебеҙҙең өйрәнелгән, бал ҡортондай эшсән, етеҙ, тиҙ боролошло ПАЗ-иктарыбыҙҙы транспорт әйләнешенән алып ҡына бөтөрмәнһәрҙәр инде, юғиһә, күрмәгәнендә күрергә тура килер.

Баш ҡалала пассажирҙар транспорты тураһында һүҙ сыҡҡас, тағы бер ауыртҡан мәсьәләгә ҡағылмау мөмкин түгел. Ул да булһа, Сипайлово бисҭәһенән Көьяҡ автовокзал менән Өфө тимер юл вокзалына барыусы маршруттарҙың минимумға ҡалдырылыуы. Шуға ла Сипайловонан тимер юл вокзалына төшөү бик ауырлашты хәҙер. Ни бары бер генә маршрут - 251- се һанлы бәләкәй генә газелгә күҙ терәп ҡалдыҡ, уныһы ла онотҡанда бер үтеп китә туҡталыштан һәм һәр ваҡыт пассажирҙар менән шыплап тултырылған була. Был аңлашыла ла, сөнки юл ыңғайы ултырған Р.Зорге урамындағы Көньяҡ автовокзалына барыусылар ҙа ошо маршрутҡа тығыла. Элегерәк, исмаһам, 11-се һанлы ҙур "Мерседес" автобусы ла йөрөй ине, ни сәбәптәндер, уны маршруттан алып ташланылар, ә бит вокзалға йөрөүселәр һаны кәмемәне, киреһенсә, арта ғына бара. Айырыуса йәй күп йөрөйҙәр. Өфө тимер юл вокзалына бына тиғән иттереп реконструкция эшләнде, тик бына уға барып етеүҙең оло михнәтҡә әүерелеүе генә бер кемде лә борсомай.

**Фирүзә ИШБИРҘИНА,**
**хеҙмәт ветераны.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Гәзитебеҙҙең 500-сө һанын ҡулығыҙға алаһығыҙ. Һеҙҙең тормошта ниндәйҙер әһәмиәткә эйәме "Киске Өфө"?

**(Башы 1-се биттә).**

***Ноәман МУСИН, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы:*** "Киске Өфө"нө яратып уҡыйым, гәзит бик йөкмәткеле сыға. Иң тәүҙә ул тема төрлөлөгө менән алдыра. Унан һуң, ҡоро факттарҙы йәнһеҙ теркәүсе рәсми баҫма түгел ул. Унда яҙылғандар һәр уҡыусының күңел түренә үтеп инә. Рухиәтебеҙ өлкәһендә күптәрҙе борсоуға һалған "ауыртҡан" темаларҙы ҡурҡмай күтәрә, проблемаларҙы ҡуя белә, уны хәл итеү юлдары хаҡында уҡыусыларына бергәләшеп уйланыу, фекер алышыу форсаты бирә.

Шуныһы ла мөһим: гәзит уҡыусы иғтибарын ваҡ-төйәк менән албырғатмай, етди ерлекле материалдар эҙләй һәм таба. Тормошобоҙҙа тулып ятҡан кире күренештәрҙе иплегенә ишаралап тәңҡитләүҙән дә тартынып тормай. Бының менән гәзит халыҡта тормошобоҙҙағы ыңғай һәм кире күренештәргә мөнәсәбәт булдырыуҙа ҙур роль уйнай.

Яҙыусы булараҡ, "Киске Өфө"лә баҫылған әҙәби әҫәрҙәрҙе лә күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа тырышам. Яңы авторҙар күренгеләп ҡала. Үҙенсәлекле генә хикәйәләр баҫыла. Әлбиттә, араларында әллә ни әҙәби камиллыҡҡа эйә булмағандары ла осрап ҡуя, шуға күрә әҙәби әҫәрҙәрҙе баҫырға әҙерләгәндә бик ныҡ талапсанлыҡ күрһәтергә кәрәк. Шиғырҙар, хикәйәләрҙе һәр һанда бирөп барғанда ла артыҡ булмаҫ ине, сөнки был әҫәрҙәр аша гәзит иң тәүҙә үҙенең зауыҡ кимәлен күрһәтә бит. Әйҙә, гәзитебеҙ әҙәбиәт өлкәһендәге йәш талантарҙы тәүләп асыусы булһын, уларға ҙур әҙәбиәткә юл башларға ярҙам итһен. Уҡыусыһына әҙәбиәтебеҙ өлгөләрен еткереп, гәзит шул уҡ ваҡытта үҙен дә пропагандалай бит.

Үкенескә ҡаршы, Өфө халҡы матбуғатҡа битарафлыҡ күрһәтә. Ниндәйҙер юлдарын табып, баш ҡалабыҙҙың әсә телендә һөйләшкән ҡатламын "Киске Өфө" тирәһенә тупларға, гәзит эшенә йәлеп итергә кәрәк ине.

***Закир ИШБИРҘИН, Ғафури районы Сәйетбаба ауылы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе:*** "Киске Өфө" бөгөнгө көндә халыҡ өсөн иң кәрәкле гәзит ул, сөнки ул халҡыбыҙ рухын байытыуға булышлыҡ итә, тарихыбыҙҙы онотмаҫҡа, илдә барған телһә ниндәй шарттарҙа ла юғалып ҡалмаҫҡа, үҙ эшендә асырға, ғаиләндә хәстәрләргә, ҡыҫҡаһы, әллә ниндәй елдауылдарға ла бирешмәй торған ышаныслы мөхитенде булдырырға өйрәтә. Ғәҙәттә, сәйәси һәм иҡтисади тотороҡһоҙлоҡ заманында кеше үҙенә таяныр көс, терәлер иң, ышанысды дуҫ эҙләй. Ә беҙгә, шөкөр, уны эҙләп тә йөрөргә түгел, ул үҙе беҙҙең өйгә килә: "Киске Өфө" тап ана шундай дуҫыбыҙ ул беҙҙең.

Эшем буйынса халыҡ араһында күп йөрөйөм. Төрлө темаларға фекер алышабыҙ, бәхәсләшеп тә китәбеҙ, кем менән генә һөйләшһәм дә, бөтәһенең фекере бер: "Киске Өфө" гәзите кәрәк беҙгә. Ул беҙҙең йоҡомһораған аңыбыҙҙы уята, ул беҙҙе маңҡортлоҡтан ҡурсалай, ул беҙҙе сәләмәт йәшәү рәүешенә өндәй, ул беҙгә төрлө ҡиәфәткә һәм төҫтәргә инеүсе мәғлүмәт дарьяһынан хаҡикәтте айырып алырға ярҙам итә.

***Фәйрүзә ЮНЫСОВА, Аҫҡын районының "Надежда" редакция- нәшриәт комплексы директоры:*** "Киске Өфө" гәзитенең абруйлы һәм оҙон ғүмерле баҫма булырына уның тәүге һандарынан уҡ шигебеҙ булманы, сөнки ул тәүҙән үк ҡабатланмаҫ йөҙөн булдырып, тайпылмай бараһы юлын дөрөҫ билдәләгәйне. Һәм ул үҙ уҡыусыларын, фекерҙәштәрен тиҙ тапты. "Киске Өфө" бөгөнгө ҡатмарлы заманда милли асылыбыҙҙы һаҡлауға баһалап бөткөһөҙ өлөш индерә. Гәзиттең маҡсаты - милләтебеҙҙе түбәнлеккә төшөүҙән, тамырҙарын юғалтыуҙан һаҡлап ҡалып, башҡалар алдында бәсен, абруйын күтәреү. Был мәсьәләне бойомға ашырыуҙы ул үҙебеҙҙең боронғо бөйөк халыҡтың варисҭары булыуыбыҙҙы аңлап, бөтә көсөбөҙҙө мәҙәниәтебеҙҙе өйрәнеүгә, иманыбыҙға ҡайтыуға, заманса һөнәрҙәр үҙләштереүгә йүнәлтеүҙә күрә.

"Киске Өфө" гәзите менән тығыҙ бәйләнештә эшләйбеҙ. Районыбыҙҙа 2002 йылда башҡорт телендә нәшер ителә башлаған "Аҫҡыным - йәнтөйәгем" гәзитенә юл күрһәтеүсе, фатиха биреүсе лә тап "Киске Өфө" гәзите булды. Был гәзитте беҙҙең районда яратып уҡыусылар байтаҡ, киләсәктә улар сафы тағы ла артыр, тигән өмөттәбеҙ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

## МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзитебеҙгә яҙылырға бер ваҡытта ла һуң түгел. Әгәр ҙә таныштарығыҙ араһында 2012 йылдың икенсе яртыһына "Киске Өфө"гә яҙылмай ҡалғандар булһа, әйтегеҙсе уларға: августың 17-нә тиклем яҙылһалар, гәзитебеҙҙе сентябрҙән алдыра башларҙар. Индекс - 50665, дүрт айға яҙылыу хаҡы - 236 һум 16 тин.**





● Шулай уҡ июлдә, августа 2013 йылдың тәүге яртыһына 2012 йыл хаҡтары менән яҙылырға була икәнен дә иҫкәртеп ҡуябыҙ. Ул квитанцияларығыҙҙы ла редакцияға ебәрә алаһығыҙ. Китаптан да яҡшыраҡ бүләк юҡ, тип иҫәпләйбеҙ һәм ошо ике айҙа 2013 йыл өсөн яҙылған 4 уҡыусыбыҙға - **"400 башҡорт халыҡ йыры"**, 4 уҡыусыбыҙға - М. Әхтәмовтың **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"** китаптарын бүләк итәсәкбеҙ. **Шулай итеп, индекс - 50665, яртыйылға яҙылыу хаҡы - 354 һум 24 тин.**

● Ә кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Рәсәй Президенты янындағы Эшҡыуарҙар хоҡуҡтарын яҡлау буйынса вәкил Борис Титов менән эш осрашыуы үткәрҙе. Унда бәләкәй һәм урта бизнесты үҫтереү, эшлекле мөхитте яҡшыртыу һәм хеҙмәттәшлек булдырыу мәсьәләләре тикшерелде.

✓БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһы Палдиски ҡалаһында үткән һабантуйҙа ҡатнашты. Палдиски мэры Каупо Каллас билдәләүенсә, беҙҙең халыҡтарҙы ике легендар милли геройҙың трагик яҙмыштары берләштерә: Салауат Юлаев 1775 йылда Эстонияға һөргөнгә ебәрелгән, Эстония Республикаһының беренсе Президенты Константин Пятс 1940 йылда Башҡортостанға ебәрелгән. Палдискиҙа үткән башҡорт һабантуйы Балтик буйында йәшәүсе барлыҡ ватандаштарҙы бергә йыйҙы. Байрам концертында "Далан" фольклор-эстрада төркөмө сығыш яһаны.

✓Башҡортостан Президенты Указы менән Башҡортостан Республикаһының Силәбе өлкәһендәге даими вәкиле итеп Амур Хәбибуллин тәғәйенләнде. Хәбибуллин Амур Ғәбиҙулла улы 1974 йылдың 21 августа Силәбе өлкәһенең Арғаяш ауылында уҡытыусылар ғаиләһендә тыуған. Белеме буйынса иҡтисадсы. "Агропромснаб" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең генераль директоры. Силәбе өлкәһенең Йәмәғәт палатаһы ағзаһы. Силәбе өлкәһендә Бала хоҡуҡтары буйынса вәкил ярҙамсыһы.

✓Архангел, Стәрлебаш муниципаль райондары Советтары ултырыштары үтте, уларҙа хакимиәт башлыҡтарының вәкәләттәрен ваҡытынан алда туҡтатыу мәсьәләләре ҡаралды. Советтар ҡарары менән Ғимран Ғәбитов һәм Фәнил Ҡаҙаҡбаев, үҙ теләктәре менән отставкаға китеүҙәре сәбәпле, хакимиәт башлығы вазифаларынан бушатылды. Советтар депутаттары ҡарары буйынса, Архангел районы хакимиәте башлығы вазифаһын ваҡытлыса Александр Комзалов, Стәрлебаш районы хакимиәте башлығы вазифаһын ваҡытлыса Вәзир Йәнбирҙин башҡарасаҡ.

✓Стәрлетамаҡ районы муниципаль районы Советының 2012 йылдың 20 авгусындағы ҡарарына ярашлы, Стәрлетамаҡ районы муниципаль районы хакимиәте башлығы вазифаһына контракт буйынса Раэль Рәхмәтуллин тәғәйенләнде.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ҺЕҘҘӘ УТЫН КИҪЕЛҺӘ...

## беҙҙә юнышҡы төшә

**Был әйтемдең варианттары: "Ат аунаған ерҙә төк ҡала", "Утын киҫкәндә тап оса", "Утһыҙ төтөн булмай" һ.б. Уларҙың мәғәнәһе, асылда, сәбәп-ғәмәлдең эҙемтә-һөҙөмтәһе лә булыуын иҫбатлаған һымаҡ яп-ябай тойолһа ла, был әйтемдең "Бармаҡтың ҡайһыһын тешләһәң дә, ауырта", "Ҡара эттең бәләһе - аҡ эткә" тигән варианттары барлығы тағы ла төпкәрәк төшөп фекер йөрөтөргә мөмкинлек бирә. Булмаһа, фекер теҙгенен шул яҡҡа тартайыҡ.**



Күберәген сәйәсмәндәр үҙенең лөғәтендә ҡулланған "Күбәләк эффекты" төшөнсәһенең асылы нимәлә тип уйлайһығыҙ? Бәҡтиһәң, әле генә, кисә, былтыр йә йөҙ йыл элек кемдеңдер һаҡһыҙлығы арҡаһында йә башҡа сәбәптән бер күбәләктең ваҡытынан алда иртә таңдан ҡанаттарын елпеүе йәки елпемәүе, йәки булмаһа, кемдеңдер осраҡлы рәүештә йәки һаҡһыҙлыҡтан күбәләктең йәнен ҡыйыуы барлыҡ кешелек тарихын үҙгәртеүе бар икән. Йәғни грамдың күпмелер өлөшөн генә тәшкил итеүсе күбәләктең күбәләге донъяны үҙгәртә ала. Үҙгәртеү генә түгел, хатта кешелекте, донъяны һәләкәткә лә алып килеүе ихтимал бәләкәй генә йән эйәһе. Нисек итепме? Хәҙер аңлатып ҡарайыҡ.

Йәйҙең иң оҙон көндәренең таңын ҡаршылағанығыҙ бармы? Быйыл, мәҫәлән, йәйҙең иң оҙон көндәренең береһе 22 июндә көн оҙонлоғо 17 сәғәт 14 минутты тәшкил итеп, ҡояш 05 сәғәт 41 минутта ҡалҡып, 22 сәғәт 55 минутта әүен баҙарына китте. Ҡояш календарь буйынса тәғәйен ваҡытта ҡалҡһа ла, таң унан күпкә иртәрәк беленә, ер өҫтө яҡтыра башлай. Был миҙгелде халыҡта "таң һарыһы" тип атайҙар.

Шулай итеп, шартлы рәүештә алынған 22 июндең таң һарыһында ниндәйҙер дәүләттең, ҡайһылыр икенсе дәүләт менән сигенә яҡын урман аҡланында таңғы ысыҡҡа мансылған япраҡ аҫтарында күбәләктәр ой-ой, йәғни, ат лөғәтендә әйтһәк, юшай икән, ти. Был саҡта әле ҡоштар ҙа йоҡоһонан уянмаған, һанда-һаяҡ ҡына өкө һупылдауы, таңғы урман әтәсе ҡурпысыҡ ҡурпылдауы ғына ишетелеп ҡала. Әммә был тауыштар таң һарыһының айырылғыһыҙ элементтары, йәғни йән эйәләренең таңғы ойоуына һис тә ҡамасауламай.

Ошондай илаһи мәлдә, Ҡояш апайҙың сыҡҡанын һәм йылмайғанын көтөп тә тормаҫтан, күбәләктәр араһындағы бер тыңлауһыҙ һәм шаталағының ҡанаттарын бер-икене елпеп ебәреүе була, уның сигналы "Домино принцибы" буйынса аҡландағы барлыҡ күбәләк халҡына тарала һәм тағы ла 40-50 минут самаһы йоҡларға тейеш булған күбәләктәр аҡлан тултырып осорға тотона. Күбәләктәр үҙ нәүбәтендә аҡландың барлыҡ бөжәктәр донъяһын йоҡонан мәлһеҙ уята. "Домино принцибы" күҙ асып йомған арала барлыҡ урманға тарала һәм ҡоштар донъяһын да хәрәкәткә килтерә. Бөжәктәр менән туҡланыусы ваҡ ҡоштар - бөжәктәргә, ваҡ ҡоштарға аусы ҡоштар ябырыла. Аусы йыртҡыс ҡоштарҙың әүҙемлеге ерҙәге ваҡ йәнлектәрҙе, ваҡ йәнлектәрҙең хәрәкәте йыртҡыс хайуандарҙы ҡуҙғыта. Йыртҡыс хайуандар хәрәкәте үҙ нәүбәтендә таңдан урманға сыҡҡан йә таң ашырып урман таңын аңдыусы һунарсыларҙың ҡомарын уята. Уларҙың мылтыҡтарынан бирелгән залп үҙ нәүбәтендә яҡындағы дәүләт сигенең уяуҙан да уяу һаҡсыларын һиҫкәндерә. Ярай әле, һиҫкәндереп кенә ҡалһа, әгәр ҙә автоматик режимға ҡуйылып, таңғы 6-ла һүндерелергә тейешле булған ракета ҡоролмалары телгә килмәһә. Әгәр ҙә был хәл була ҡалһа, хәҙерге замандың ядро ҡоралына ҡаршы "Про системаһы" үҙ эшен белә.

Ҡыҫҡаһы, "Күбәләк эффекты"н, үҙем аңлағанса, иң ябай һәм тупаҫ формала, шартлы рәүештә аңлатып бирергә тырыштым да инде. Беҙҙең күҙгә күренмәгән, космоэнергеттар теле менән әйткәндә, нескә пландағы хаотик донъяның ошондай "Күбәләк эффекты", "Домино принцибы" күренештәрен атай-олатайҙарыбыҙ элек-электән аңлаған, күҙәткән һәм ошо рәүешле барлыҡҡа килгән дә инде "Һеҙҙә утын киҫелһә, беҙҙә юнышҡы төшә" әйтеме.

Мин йәйҙең иң оҙон көндәренең береһе булған 22 июнде шартлы рәүештә генә килтерһәм дә, был да юҡҡа ғына түгелдер. Нимә генә булмаһын, Гитлер тап ошо көндөң таңында беҙҙең илгә ҡаршы һуғыш башлаған. Кем белә, бәлки, уның иҫәбенсә, "Көтөлмәгәнлек факторы" менән "Күбәләк эффекты" араһында ла бер бәйләнеш барҙыр. Сөнки иң оҙон көндөң төнө лә иң ҡыҫҡаһы була. "Көтөлмәгәнлек факторы" философияның көтөлмәгәнлек категорияһы - "Күбәләк эффекты"ның бойомға ашыу формаһы ғыналыр, ә был эффекттың йөкмәткеһе "сәбәп-эҙемтә"-"эҙемтә-сәбәп" сылбырынан торған комплексты тәшкил итә. Был үҙ нәүбәтендә халыҡ ижадындағы ҡыҙыҡлы бер һамаҡты хәтерләтә. Һеҙ уны "Бәйләнештә" сайты аша Айсулпан Бураҡаева башҡарыуында ҡарай алаһығыҙ:

*Әп-ши, сумаҙан,*
*Әбей битен йыумаған.*
*Әбей битен йыуыр ине,*
*Ҡомғанда һыу булмаған.*
*Ҡомғанда һыу булыр ине,*
*Ҡыҙы һыуға бармаған.*
*Ҡыҙы һыуға барыр ине,*
*Көйәнтәһе булмаған.*
*Көйәнтәһе булыр ине,*
*Атаһы яһамаған.*
*Атаһы ла яһар ине,*
*Лесник ағас бирмәгән.*
*Лесник ағас бирер ине,*
*Аҡсалары булмаған.*
*Аҡсалары булыр ине,*
*Сауҙалары уңмаған.*
*Сауҙалары уңыр ине,*
*Һатыр нәмә булмаған.*
*Шуға күрә был әбей*
*Бөгөн битен йыумаған.*

Донъяла барған бер ваҡиға ла, хатта күбәләктең ҡанат елпеүе лә эҙһеҙ үтмәй. Хатта бер кешенең хилафлығы өсөн дә бар кешелек яуап бирә. Ҡайҙалыр һуғыш сыҡһа, һыу баҫһа, нефть вышкалары шартлаһа, был ҡаза шунда уҡ бар донъяға уртаҡ булған аҡса берәмектәрендә сағылыш таба һәм бының өсөн бар кешелек тинләп булһа ла үҙ өлөшөн индерә, түләй башлай. Тимәк, донъяла барған барлыҡ ваҡиғалар өсөн барыбыҙ ҙа берҙәй үк яуаплы.

Әйтеүҙәренсә, биржаларҙа, банктарҙа долларҙың йә евроның нисәлер тингә йә һумға ҡапыл артыуы йә кәмеүе арҡаһында аҡса эшләп ҡалырға тырышыусылар донъяның ҡайһылыр урынында ер тетрәүен, һуғыш сығыуын теләй икән. Бертольт Брехттың Мамаша Куражы һуғыш теләгән кеүек. Билдәле булыуынса, Кураж 1624-1636 йылдарҙа Европала барған һуғышта үҙенең арбаһы менән кәсеп итеп йөрөй, Пушкиндың табут яһаусыһы һымаҡ. Кураж һуғыштарҙың тынып торған сағын яратмай, ҡайғыра, сөнки ул саҡта кеше үлмәһә, уға табыш килмәй башлай. Кешеләрҙең бәхетһеҙлегендә үҙенә байлыҡ туплаусыларҙың барыһын да Мамаша Кураж тип атарға була. Ҡыҫҡаһы, хәҙерге заман кураждарының күбеһе биржаларҙа һәм банктарҙа ултыра.

"Һеҙҙә утын киҫелһә, беҙҙә юнышҡы төшә" әйтеме, шулай итеп, бар донъяны, кешелекте киләсәк өсөн берҙәй үк яуаплылыҡҡа саҡырыусы иҫкәртеү ҙә һымаҡ яңғырай. Ә инде милләтте һаҡларға өндәүсе асылын Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғарипов үҙенең ошо шиғыр юлдарында бик асыҡ итеп әйтеп биргән:

*Ил бәхете менән*
*бәхетле бул,*
*Ил ҡайғыһы менән*
*ҡайғылы.*
*Иң ҙур бәхетһеҙлек*
*булыр ине*
*Шул ҡайғынан һиңә*
*айырылыу...*

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓"500 ферма" республика программаһына үҙгәрештәр индерелде. Хәҙер субсидияларҙы иҫке биналарҙы яңыртҡанда һәм реконструкциялағанда ғына түгел, яңы заманса малсылыҡ комплекстарын төҙөгәндә лә алырға була, тип асыҡланылар республиканың аграр ведомствоһынан.

✓Мәскәүҙә мосолмандар хаҡында һәм мосолмандар өсөн дөйөм Рәсәй "ӘлРТВ" телеканалы эш башлай. Каналдың тәүге тапшырыуы беренсе тапҡыр Ураҙа байрамында - 19 августа эфирға сығасаҡ. Тапшырыуҙар тәүлек әйләнәһенә 8 республикала (Башҡортостан, Татарстан, Кавказдың 6 республикаһы) күрһәтеләсәк. Каналды "Триколор ТВ" проектының юлдаш телевидениеһына эйә булыусылар ғына ҡарай аласаҡ.

✓Дөйөм Рәсәй буйынса балаларҙың бушлай ышаныс телефоны эшләй башланы. Әгәр ғаиләлә бала менән ҡаты мөғәмәләлә булһалар, ғаиләнән ситтә уны йәберләүҙәргә дусар итһәләр, тиҫтерҙәре уны ҡыйырһытып, ситкә типһә, балаға ҡарата көс ҡулланыу йәки уны енси мөнәсәбәттәргә ылыҡтырыу шаһиты булһағыҙ, 8-800-2000-122 номерына шылтыратығыҙ. Психологик ярҙам аноним, бушлай күрһәтелә һәм мөрәжәғәт итеүҙе сер итеп һаҡлау гарантиялана.

✓Башҡортостанда йыл башынан халыҡтың артыуы күҙәтелә. Тәүге алты ай эсендә, үткән йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда, тыуғандар һаны 7,7 процентҡа артҡан, ә үлем осраҡтары 3,5 процентҡа кәмегән. Һөҙөмтәлә халыҡтың тәбиғи үҫеше 0,7 процент тәшкил иткән. Шулай уҡ республикала эшкә яраҡлы йәштәгеләр араһында үлем осраҡтары 8,2 процентҡа кәмегән.

✓Республикала ауырыуҙар һаны 1,8 процентҡа кәмегән. Кешеләр туберкулез, наркомания, токсикомания, венерик ауырыуҙар һәм йоғошло тире ауырыуҙары менән әҙерәк ауырый башлаған. Дөйөм ауырыуҙар структураһында тәүге өс урында тын алыу ағзалары, ҡан йөрөшө системаһы һәм аш һеңдереү ағзалары ауырыуҙары тора.

✓Аграрийҙар быйыл 55 мең тонна күләмендә күсмә страховка фондын булдырырға тейеш. Был фонд былтыр башлап ойошторолғайны. Быйыл был практика дауам ителәсәк. Залог операциялары механизмы 23 июлдән эш башлай. Был фонд ауыл эшсәндәре өсөн финанс хәүефһеҙлеге гарантияһы булып тора.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Республиканың абсолют батыры исеменә һәм автомобиль аҫҡысына Алик Яҡупов лайыҡ булды. Командалар буйынса беренсе урынға - Өфө командаһы, икенсе урынға - Салауат районы батырҙары, өсөнсөгә ауырғазылар сыҡты.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН

## "ҮҘЕҢДЕКЕН ҺАЙЛА - ҮҘЕҢДЕКЕН ҺАТЫП АЛ!"

**Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов, республика халҡы урында етештерелгән аҙыҡ-түлеккә өҫтөнлөк бирһен өсөн, шундай саҡырыу ташлағайны. Бының сәбәбен ул үҙебеҙҙә етештерелгән ризыҡтарҙың сифаты юғары һәм экологик яҡтан таҙа булыуы менән дәлилләгәйне. Ә инде ситтән индерелгән аҙыҡ-түлектең йыш ҡына бындай сифаттарға эйә булмауын беҙ беләбеҙ инде.**

Ошо көндәрҙә Дүртөйлө районына сәфәре ваҡытында республика башлығы был юҫыҡҡа тағы ла иғтибар йүнәлтте. Ә инде журналистар менән аралашҡанда ул был проблеманың контроль-тикшереү органдарының тейешенсә эшләмәүенә бәйле булыуын билдәләне. Күптән түгел булып уҙған РФ Дәүләт Советы ултырышында ла был мәсьәлә иғтибар үҙәгендә була. Владимир Путин контроль структураларының билдәле бер өлөшөн субъекттарға биреү тураһында һүҙ ҡуҙғата. Әгәр был идея ғәмәлдә тормошҡа ашырылһа, 2013 йылдан магазиндарҙағы аҙыҡ-түлек сифатын тикшереү функциялары республика ҡарамағына күсәсәк һәм был ваҡытта инде талап та ҡаты буласаҡ.

## ЮЛДАР СОҠОР-САҠЫРЛЫ...

**Башҡортостан Республикаһы буйынса ЮХХДИ идаралығының рәсми статистикаһы күрһәтеүенсә, йыл башынан алып 340 юл-транспорт фажиғәһе теркәлгән. Уларҙа 49 кеше үлгән һәм 430-ы төрлө дәрәжәләге тән йәрәхәте алған.**

Бындай фажиғәләргә юлдарҙың тейешле шарттарға һәм талаптарға тулыһынса яуап бирмәүе лә сәбәпсе. Ә барлыҡ талаптарҙың үтәлеүе өсөн башҡарма власть органдары, аныҡлап әйткәндә, автомобиль юлдары идаралығы яуаплы. Ә юл билдәләрен ҡуйыу, уларҙың законға тап килеү-килмәүен тикшереү менән район һәм ҡалалар префектуралары шөғөлләнә. Ләкин юлдарҙың бөгөнгө торошона ҡарап, тейешле хеҙмәттәр үҙ бурысын тулыһынса үтәй, тип әйтеп булмай. Шул йәһәттән 23 июлдән Рәсәй Автомобилселәр федерацияһының Башҡортостан Республикаһы буйынса вәкиллеге юлдарҙағы хәүефһеҙлек талаптарына яуап бирмәгән урындарҙы асыҡлау, юл билдәләре һәм светофорҙарҙың ҡуйылышын тикшереү маҡсатында рейдтар үткәрә башланы. Шулай итеп, Өфө юлдарына ла комплекслы тикшереү үткәреләсәк. Рейд бер районда 3 көн барасаҡ. Ул Инорстан һәм Черниковканан старт аласаҡ.

## ИҢ КӨСЛӨ КӨРӘШСЕ КЕМ?

**Район һәм ҡала һабантуйҙарында еңеүселәр араһында уҙғарылған республика чемпионатында иң көслө көрәшсе титулына 18 йәштән алып төрлө категориялағы 100-ләп батыр ҡатнашты.**

Араларында билбаулы көрәш буйынса донъя чемпионы Альберт Рәхмәтуллин, милли көрәш буйынса донъя чемпионы Рәдиф Аҡчурин, өс тапҡыр донъя чемпионы Юрий Сабанов һәм башҡаларҙың булыуы төп приз - автомобиль өсөн алышҡа сәм генә өҫтәне. Шулай ҙа турнирҙың иң ҡыҙыҡ өлөшө көрәш буйынса өс тапҡыр Рәсәй чемпионы Алик Яҡупов һәм уның уҡыусыһы, Мәләүез спортсыһы Альберт Рәхмәтуллин араһында барҙы. Ләкин тәжрибә йәшлекте арҡаһына һалды: республиканың абсолют батыры исеменә һәм автомобиль аҫҡысына Алик Яҡупов лайыҡ булды. Командалар буйынса беренсе урынға - Өфө командаһы, икенсе урынға - Салауат районы батырҙары, өсөнсөгә ауырғазылар сыҡты.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ДОНЪЯ БАЛАЛАРЫ...

## Өфөлә көс һынашасаҡ



**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялаловтың журналистар менән сираттағы матбуғат конференцияһы Өфөлә уҙасаҡ Ҡышҡы халыҡ-ара балалар уйындарына әҙерлек эштәре барышына арналды.**

Билдәле булыуынса, был ҙур спорт сараһы (уны икенсе төрлө балалар Олимпиадаһы тип тә әйтәләр) баш ҡалабыҙҙа 2013 йылда үтәсәк. Йәйге уйындар иһә ошо көндәрҙә Көньяҡ Кореяның Дэгу ҡалаһында тамамланды. Унда Өфөнән 18 бала Рәсәй йыйылма командаһы составында ҡатнашып, уңышлы сығыш яһаны: тхэквондо буйынса ике алтын миҙал яулауға өлгәштеләр. Дэгу ҡалаһында Өфө етәкселеге лә булды. Сәфәр барышында Ирек Ялалов ярыштарҙа ҡатнашҡан ил вәкилдәре алдында баш ҡалыбыҙҙы презентацияланы. Ярыштарҙы ябыу тантанаһында Халыҡ-ара балалар уйындары әләме Дэгу ҡалаһынан Өфөгә тапшырылды.

Ҡышҡы уйындар барышында Өфөлә дүрт спорт объекты - "Өфө-Арена" боҙ һарайы, спорт Һарайы, "Олимпик-парк" тау саңғыһы комплексы, "Биатлон" спорт комплексы эшләйәсәк. Спортсылар һәм тренерҙар "Йәшел сауҡалыҡ" санаторийында урынлашасаҡ. 900 спортсы килеүе, барлығы ике мең тирәһе ҡунаҡ ҡабул ителеүе көтөлә. Бөгөн спорт объекттарында төҙөкләндереү эштәре бара. "Тау саңғыһы комплексында йөҙләп автомобилгә тәғәйенләнгән туҡталыш майҙаны төҙөйбөҙ. Бынан тыш, тау саңғыһы буйынса балалар спорт мәктәбе төҙөләсәк. Спорт һарайы эргәһендәге биләмәне тәртипкә килтерәбеҙ", - тип һөйләне Ирек Ишмөхәмәт улы. Ярыштарҙы ойоштороуға, әҙерлек эштәренә федераль бюджеттан аҡса бүленмәй, республика ҡаҙнаһынан бүленгән аҡса иһә Биатлон комплексын төҙөкләндереүгә китәсәк. Йәғни сара тәү сиратта ҡала бюджеты иҫәбенә үтәсәк.

Ярыштарға әҙерлек эштәренән тыш, ҡалала башҡа спорт-һауыҡтырыу объекттарын да төҙөкләндереү ниәтләнә. Яҡын арала "Нефтяник" стадионы тулыһынса яңыртыласаҡ, тамашасы урындары өҫтәләсәк. Ҡалала бассейндар етешмәй, тип билдәләне ҡала етәксеһе. Шуға күрә "Буревестник" комплексында тағы өс ванна төҙөү көтөлә. Береһе - спортсылар, ҡалған икәүһе ял итеүселәр өсөн буласаҡ. "Строитель" стадионы базаһында техник спорт төрҙәре - спидвей, мотоуҙыш өсөн спорт комплексы, бынан тыш уның эргәһендә Орджоникидзе һәм Калинин районы өсөн боҙ аренаһы төҙөләсәк. Ҡалала хоккей коробкаларын яңыртыу эштәре планлаштырыла.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Көньяҡ Корейла булғанда Өфө башлығы Дэгу ҡалаһының ҡаҙаныштарын, тәжрибәһен өйрәнә, эшлекле осрашыуҙар үткәрә. Юлдар төҙөү буйынса сит илдәр беҙҙән күпкә алдараҡ киткәне билдәле. "Беҙҙә йыш ҡына юлдарҙы киңәйтеү, ҡала эсендә ағастарҙы киҫеү өсөн тәнҡитләйҙәр. Ә бындай тәжрибә сит ил ҡалаларында, шул иҫәптән Дэгула күптән тормошҡа ашырыла. Ҡалала үҫкән ағастарҙы унда даими алыштырып торалар. Билдәле бер бейеклеккә еткән үҫемлекте махсус технология ярҙамында ҡала ситенә, урманға күсереп ултырталар, уның урынына йәш ағастар ҡалҡып сыға. Ни эшләп беҙгә лә был ысулды файҙаланмаҫҡа?"- ти И. Ялалов.**

**Ҡала башлығы билдәләүенсә, Өфөнөң көньяҡ өлөшөндә бөгөнгә 340 ағас киҫелгән. Был үткән йыл менән сағыштырғанда, ике тапҡырға кәмерәк. Уның урынына 207 төп ағас ултыртылған, быйыл тағы меңгә яҡын ағас ултыртыласаҡ.**

**Мәһәҙи МОРАТОВ.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ТЫҒЫНДАРҘАН...

## трамвай ҡотҡармаҫмы?



**Ошо көндәрҙә Өфө урамдары буйлап өр-яңы дүрт трамвай йөрөй башланы. Уст-Ҡатау ҡалаһындағы трамвай заводынан һатып алынған трамвайҙарҙы линияға сығарыр алдынан депола бәләкәй генә тантана үткәрелде, ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов трамвай йөрөтөүсегә аҫҡыстарҙы үҙе тапшырҙы һәм яңы техника менән танышты.**

КТМ 71-623-02 маркалы трамвай вагондары Өфө ҡалаһы халҡы өсөн яңылыҡ түгел. Уларҙың тәүгеләре тәжрибә рәүешендә 2009 йылда Өфөгә һәм Түбәнге Новгород ҡалаһына ебәрелгәйне. Бөгөн был трамвай вагондары бөтә заман талаптарына тап килә, тине депо етәкселеге. Ирек Ялалов яңы трамвайҙарға ҡуйылған электрон билет һатыу терминалын юғары баһаланы һәм: "Бындай ҡоролмалар башҡа транспорттарға ла ҡуйылырға тейеш", - тине.

Техник күрһәткестәргә килгәндә, яңы вагон күп кенә уңайлыҡтар менән йыһазландырылған: ғәриптәр һәм балалы ҡатындарға уңайлы булған тәпәш иҙәндәр, электрон табло, кондиционер системаһы был техниканы күркәм һәм уңайлы итә. Уның аҙ тауышлы һәм йомшаҡ хәрәкәтле булыуын да өҫтәргә кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бер кемде лә көсләп йәмәғәт транспортына күсереп булмай, әлбиттә. Ә шулай ҙа бөгөн Өфөлә трамвай хеҙмәте менән файҙаланыусылар һирәгәйҙе, шуға ла төп проспекттан трамвай линиялары алынды. Әммә ваҡыт күрһәтер. Бәлки, беҙҙә лә йәйлап Европаның Прага, Хельсинки, Страсбург ҡалаларындағы кеүек трамвайҙарға күсә башлар халыҡ...**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓2012 йылдың 1 ғинуарына ҡарата Башҡортостандың мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларына путевка алыуға 1,5-6 йәштәрҙәге 46 мең бала сиратта тора. Йәш ата-әсәләр бала тыуғас та сиратҡа торорға тейеш. Бының өсөн аҙнаһына ике тапҡыр район мәғариф бүлектәрендә граждандар ҡабул ителә. Сиратҡа тороу ғаризаһын хәҙер Мәғариф идаралығы порталында ла бирергә була. Бында заявкалар йыл әйләнәһенә ҡабул ителә.

✓Өфө ҡала округы хакимиәтенең сираттағы оператив кәңәшмәһендә хакимиәт башлығы Ирек Ялалов юл эштәре башҡарыу сифатын ҡаты тәнҡиткә алды. Сифат яғынан ҡәнәғәтләндермәгән эштәр өсөн хакимиәт түләмәйәсәк, тип һыҙыҡ өҫтөнә алды ул. Шулай уҡ юл япмаһы сифатына контроллек итеү лабораторияһы әлегә тиклем булдырылмауы тураһында ла әйтелде. Ирек Ялалов иң ҡыҫҡа сроктарҙа асфальтты етештереү, транспортлау һәм түшәү этаптарында экспертиза процесын яйға һалыуҙы талап итте.

✓Өфөлә балалар баҡсаларының һаны йылдан-йыл артасаҡ. 2012 йылда ғына ун учреждение төҙөү планлаштырыла. Әлеге ваҡытта Өфөнөң мәктәпкәсә белем биреү системаһында 229 учреждение һәм 4 башланғыс белем биреү мәктәп-балалар баҡсаһы иҫәпләнә. Әлеге ваҡытта Өфөнөң балалар баҡсаларына путевка алыуға 17793 кеше сиратта тора. Быйыл 11 меңдән ашыу путевка биреү планлаштырыла.

✓Башҡорт дәүләт аграр университеты студенттары командаһы волейбол буйынса юғары уҡыу йорттары араһында Европа уйындары призеры булды. Финалда студенттар Лозанна университеты (Швейцария) спортсылары менән осрашып, 3:1 иҫәбе менән еңеп сыҡты. Финал уйыны һөҙөмтәләре буйынса Башҡортостан студенттары почетлы өсөнсө урын яуланы. Университеттар араһында беренсе Европа уйындарында 32 илдән 151 уҡыу йорто исеменән 250 команда сығыш яһаны. Турнирҙы асыу тантанаһы 14 июлдә Испаниялағы Кордоба ҡалаһының үҙәк стадионында үтте.

✓Быйыл Өфөлә йәйге биатлон буйынса донъя чемпионаты, йәштәр командалары араһында хоккей буйынса донъя чемпионаты, 2013 йылда VI Ҡышҡы халыҡ-ара балалар уйындары үтәсәк. Ошо айҡанлы БР Президенты инициативаһы менән Башҡортостан юлдаш телевидениеһы төрлө спорт һәм мәҙәни сараларҙы юғары асыҡлыҡтағы форматта төшөрә торған 16 камералы күсмә телевизион комплекслы булды. Бөгөнгө көндә илдең 10 төбәге генә бындай комплексҡа эйә.

*КӨТКӘН ХӘБӘР*

# БЫУАТ ВАҠИҒАҺЫНДАЙ...

## изге ғәмәл булыр

**Салауат Юлаев проспектындағы собор мәсетен төҙөү мәсьәләһе Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтендә тикшерелде. Июнь айында республика Президенты тарафынан төҙөлөш барышын күҙәтергә тейеш булған попечителлек советы составы үҙгәртелгәйне. Ултырышты яңы советтың рәйесе БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов алып барҙы һәм туҡтатылған төҙөлөштө яҡын арала йәнләндереү бурысын алға ҡуйҙы.**

БР Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты рәйесе Хәлит Мәхмүтов хәбәр итеүенсә, был эшкә республиканың иң яҡшы проектлау ойошмалары йәлеп ителгән. Проект-смета документацияһы әҙер, әммә бинаның эске биҙәлеше мәсьәләләре асыҡ ҡала. Бөгөнгө көнгә яҡынса 400 миллион һум үҙләштерелгән. Средстволар, нигеҙҙә, хәйриә рәүешендә айырым кешеләрҙән йыйылған. Проекттың дөйөм хаҡы - бер миллиард 400 миллион һум.

2006 йылда уҡ башланған төҙөлөш әлегә туҡтап ҡалған. Хәҙер хәйриә аҡсаһы йыйыу бурысын яңы махсус фонд үҙ өҫтөнә аласаҡ. С. Сәғитов билдәләүенсә, мәсетте төҙөүгә бюджеттан аҡса бүленмәйәсәк. "Рәсәйҙә дин дәүләттән айырылған. Шуға күрә изге йорттар бары тик хәйер аҡсаһына ғына төҙәлә, - тине Салауат Тәлғәт улы. - Беҙҙең бурыс - төҙөлөш барышын ойоштороу, уны ғәмәлгә ашырырға ярҙам итеү".

Салауат Сәғитов Өфөлә собор мәсетен төҙөү мәсьәләһе менән махсус рәүештә шөғөлләнгән ойошма булдырырға һәм уның ҡарамағында фонд ойоштороорға тәҡдим итте. Булдырыласаҡ фонд халыҡ араһында шик тыуҙырырға тейеш түгел. Төҙөләсәк объекттың әһәмиәтен, талап ителгән аҡса күләмен иҫәптә тотоп, эште Хөкүмәт тулы контролгә алырға тейеш, тигән фекерҙә совет ағзалары. Бының өсөн тап дәүләт учреждениеһы - Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты йәки Мәҙәниәт министрлығы фонд учредителе булып торорға тейеш.

Салауат Сәғитов шулай уҡ төҙөлөш барышында ҡатмарлы хәлдәр һәм ҡаршылыҡтар килеп тыумаһын өсөн мәсет проектының ислам дине ҡанундарына тап килеүенә иғтибарын йүнәлтте. Совет ултырышында төҙөлөш проектын яңынан ҡарап сығыу бурысы ҡуйылды. Сөнки буласаҡ мәсеттең тышҡы һәм эске йөҙө бөхәстәр ҙә тыуҙырып алғайны. Башҡортостан Республикаһы мосолмандарының Диниә назараты төҙөүселәр менән бергәләп ошо мәсьәләгә лә яҡын арала нөктә ҡуйырға тейеш.



**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Яңы мәсет Рәсәйҙә иң ҙуры буласаҡ, тип көтөлә. Архитекторҙар уны ғәрәп мәсеттәренә оҡшатып проектлаған. Йәғни бер көмбәҙе һәм дүрт манараһы буласаҡ. Көмбәҙҙе үтә күренмәле быяланан ҡорорға ниәтләйҙәр. Манараларҙың бейеклеге 70 метрҙан ашыу буласаҡ, тип планлаштырылған. Дини байрамдарҙа Өфөнөң башҡа мәсеттәре барлыҡ мосолмандарҙы ҡабул итеп бөтә алмай, шуға ла яңы мәсетте төҙөүҙе тиҙләтеү бик кәрәк. Әгәр изге ниәт тормошҡа ашһа, унда бер юлы ике мең кеше килә аласаҡ.**

**Мөнир ИҠСАНОВ.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ПЕНСИОНЕРҘАР...

## яңы белем үҙләштерә

**"Өсөнсө быуын халыҡ университеты" республика программаһы яңы йүнәлештәр менән тулыландырылды. Мөһим предметтарҙы өйрәнеү өлкән быуын вәкилдәренә һәр төрлө тормош хәлдәрендә үҙҙәрен ышаныслыраҡ тоторға ярҙам итәсәк.**

"Хәҙер республикабыҙҙың өлкән йәштәге кешеләре халыҡ университеттарында компьютер грамотаһын, сит телдәрҙе, ғаилә психологияһы нигеҙҙәрен, шулай уҡ шәхси гигиена һәм физкультураны ғына өйрәнеп ҡалмай, бәлки, заманса йәшәлсә-емеш технологияһы, хоҡуҡ һәм финанс дисциплиналары, күп фатирлы йорт менән идара итеүҙең үҙ аллы иҡтисади нигеҙҙәре буйынса ла белем аласаҡ. Хоҡуҡ һәм финанс эшмәкәрлеге нигеҙҙәре буйынса уҡырға пенсионерҙар үҙҙәре теләк белдерҙе", - тип хәбәр итәләр БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығынан. Ысынлап та, был өлкәлә килеп тыуған ябай ғына осраҡтарҙа ла хәбәрҙарлыҡ, мәғлүмәтлелектең булмауы теге йәки был мәсьәләне хәл итеүҙе ҡатмарлаштыра йә булмаһа өлкән йәштәгеләрҙең йылғыр "эшем эйәләре" тарафынан алданыуына килтерә. Торлаҡ менән идара итеү мәсьәләһенә килгәндә, проектты ойоштороусылар тарафынан республика парламентарийҙарының Башҡортостанда торлаҡ-коммуналь хеҙмәтләндереүгә ҡағылышлы уҡыуҙы үткәреү тураһындағы тәҡдиме иҫәпкә алынды.

Оло йәштәгеләрҙе мәғариф һәм социаль тормошҡа йәлеп итеүгә ҡоролған был программа 2013 йылға тиклем иҫәпләнеп, Башҡортостанда былтыр старт алғайны. Ул саҡ халыҡ университетына 20 мең кеше яҙылғайны, шуларҙың 16 мең самаһы уҡыуҙы тамамланы. Алдағы ике йылда 40- 50 меңләп пенсионер тормошта бик тә кәрәге тейерлек белемгә эйә буласаҡ. Быйыл проект яңы дәрт менән эш башланы: дисциплиналар артыу менән бергә уның матди һәм финанс базаһы ла нығына - былтырғы менән сағыштырғанда финанслауҙың дөйөм күләме дүрт тапҡырға арттырылды. Республика бюджетынан уҡыуҙы ойоштороуға ғына түгел, ә кәрәкле биналарҙы йыһазландырыуы өсөн дә аҡса бүленә.

*ҺОРАУ - ЯУАП*

### СИКЛӘҮҺЕҘ ВАҠЫТҠА ИНВАЛИДЛЫҠ

**III төркөм инвалидымын. Йыл да комиссияға саҡыртып, ҡайтанан тикшереп йонсоталар. Кемдәргә инвалидлыҡ сикләүһеҙ ваҡытҡа (ғүмерлеккә) бирелә - шул турала аңлатып яҙһағыҙ ине?**

- Медицина хоҡуғында сикләүһеҙ ваҡытҡа бирелеүсе инвалидлыҡ төшөнсәһе бар. Ул түбәндәге осраҡтарҙа тәғәйенләнә:

- Инвалидлыҡ категорияһы булған 60 йәшлек ирҙәргә һәм 55 йәшлек ҡатындарға. Әгәр киләһе медицина тикшерелеү көнөнә уларға 60 йәки 55 йәш тулырға тейеш булһа, ошо йәштән кесерәк булған инвалидтарға.
- 15 йыл буйына үҙҙәренең инвалидлыҡ төркөмөндә тотороҡло теркәлеп килгән йәки сәләмәтлек торошо насарайыуға барған I һәм II төркөм инвалидтарына.
- Биш йыл элек I төркөм инвалидлыҡ тәғәйенләнгән 55 йәштән өлкән ирҙәргә һәм 50 йәштән өлкән ҡатындарға.
- I һәм II төркөм Бөйөк Ватан һуғышы инвалидтарына.
- Илдәге хәрби хәрәкәттәр мәлендә алған яралары йәки хеҙмәт иткәндә дусар булған ауырыуы буйынса инвалидлыҡ тәғәйенләнгән хәрби хеҙмәткәрҙәргә, әгәр медицина тикшерелеүе үткәндә ирҙәргә - 55, ҡатындарға 50 йәш тулған булһа.
- Йәшенә ҡарамайынса, ауырыуы Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең 2008 йылдың 7 апрелендәге 247-се Ҡарарҙағы исемлеккә тап килһә. Был иһә һәр төрлө яман шеш, дауалауға бирелмәгән яман булмаған баш мейеһе шеше, аҡыл зәғифлеге, һиҙеү-тойоу ағзалары эшендә үҙгәрештәргә килтереүсе нервылар системаһы ауырыуҙары, ауыр нервылар ауырыуҙары, һуҡырлыҡ, һаңғыраулыҡ, эске ағзалар сирҙәре менән яфаланыусыларға ҡағыла.

### ТАШЛАП КИТМӘГЕҘ

**Юл-транспорт бәрелешендә ғәйепләмен, зыян ҙур түгел, шуға күрә зыян күреүсе менән үҙ-ара килешеп, юлыбыҙҙы дауам иттек. Ә шулай ҙа күңел тыныс түгел: бының берәй әҙемтәһе килеп сыҡмаҫмы?**

- Һеҙ дөрөҫ эшләмәгәнһегеҙ. Ниндәй генә осраҡта ла транспорт бәрелеше урынын ташлап китергә ярамаҫ ине, сөнки тап ошондай осраҡтарҙы үҙ файҙаһына бороп, мутлашыусылар күбәйҙе бөгөн. Шундай осраҡтар бар: зыян күреүсе, мәҫәлән, бәрелеш урынына кире килеп тора ла ГАИ-ға шылтырата һәм ғәйепленең был урынды ташлап китеүе хаҡында ялғанлай, был осраҡҡа документтар тултырыуҙы һәм зыянды ҡаплатыуҙы талап итә. Юл-транспорт бәрелеше урынын ташлап киткән өсөн 15 тәүлеккә административ ҡулға алыу ҡаралғанын да онотмаҫҡа кәңәш итәбеҙ.

### МИТИНГЫЛАР ӨСӨН ШТРАФ

**Митингылар тураһында закон ҡабул ителгән, тип ишеттем, штраф санкциялары күпмегә артты икән?**

- Әлеге документҡа ярашлы, тәртип боҙған граждандар һәм юридик шәхестәр өсөн штраф күләме тиҫтәләрсә тапҡырға арттырылған. Мәҫәлән, массовый акциялар ойоштороған өсөн иң юғары штраф 2 меңдән алып 1,5 млн. һумғаса, ә унда ҡатнашыусы ябай кешеләргә 1 меңдән 1 миллионғаса тәшкил итә. Закон шулай уҡ уны боҙоусыларға ҡарата мотлаҡ башҡарылырға тейешле эш индереү тәртибен ҡарай, митингыға битлек кейеп килеүҙе тыя, халыҡты күпләп йыйып, рөхсәт ителмәгән акциялар ойошторған өсөн, әгәр был ваҡытта йәмәғәт тәртибе боҙолоуға юл ҡуйылһа, яза саралары индерә. Бынан тыш, бер йыл эсендә массовый саралар ойоштороғанда ҡылынған тәртипһеҙлектәр өсөн ике йәки унан да күберәк тапҡыр административ яуаплылыҡҡа тарттырылған кешеләргә митингылар ойоштороу тыйыла.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Бронхит

❖ Ашар алдынан 30-40 минут алда ас ҡарынға 2-шәр сей йомортҡа эсергә.

❖ Ҡыҙыл көртмәлегә ҡайнаған һыу ҡойорға һәм үҙегеҙгә оҡшаған тиклем шәкәр өҫтәргә. Яртышар стаканлап эсергә. Был төнәтмәне һыуыҡтыста һаҡларға була, тик эсер алдынан бүлмә температураһына тиклем йылытығыҙ. Көнөнә өс тапҡыр эсергә, ул йүткереүҙе баҫа, йөҡоно нормаға килтерә.

❖ Йәшел әстерхан сәтләүегенә араҡы ҡойоп, 40 көн ҡояшлы урында тоторға. Көн дауамында 3-4 тапҡыр 1-әр балғалаҡ эсергә.

❖ Кишер һуты менән бал (1:1) бик файҙалы. Уны көнөнә 2-3 тапҡыр 1-2 ҡалаҡ ашарға.

❖ Алоэ һуты - 15 г, ҡаҙҙың эс майы - 100 г, аҡ май - 100 г, бал - 100 г, какао - 50 г. Бергә болғатырға һәм көнөнә 2 тапҡыр эҫе һөткә болғатып (бер стакан һөткә 1 ҡалаҡ) эсергә.

❖ Әгәр ҙә бауыр менән үт ҡыуығы нормала икән, бронхитты һуған төнәтмәһе менән дауаларға мөмкин. Тауыҡ йомортҡаһы ҙурлығындағы, ҡабығынан әрселмәгән 2 һуғанды 100 г эре шәкәр өҫтәлгән бер литр һыуҙа 10-15 минут ҡайнатырға. Һыуытып, ваҡ йотомдар менән эсергә.

❖ Ҡырғыҙстан ҡырылған йәки ит турағыстан үткәрелгән 500 г һуғанды 50 г бал, 400 г шәкәр менән болғатып, 1 литр һыу ҡойорға һәм һыуытырға. Ҡапҡаслы һауытҡа һалып, һыуыҡтыста һаҡларға. Көнөнә 3 тапҡыр 2-шәр ҡалаҡлап ҡабул итергә.

### Бронхыларҙы нығытыу

❖ 0,5 л ҡара торма һутын 400 г бал менән болғатырға. Кисен ашар алдынан 2-шәр ҡалаҡлап эсергә.

❖ 1 баш һарымһаҡ менән 10 баш ваҡлап туралған һуғанды һөттә йомшарғансы ҡайнатырға, 1 балғалаҡ бал өҫтәргә. Көнө буйына һәр сәғәт һайын 1-әр ҡалаҡлап ашарға.

❖ Мандарин ҡабығы төнәтмәһен көнөнә өс тапҡыр, 2-3-әр ҡалаҡлап эсергә.

❖ 1 балғалаҡ ҡарағай бөрөһө йәки 2 балғалаҡ эвкалипт япрағына ярты стакан һыу ҡойоп, утҡа ҡуйырға. Ҡаты ҡағыҙҙан рупор яһап, 80-100 тапҡыр һуларға.

❖ 1 һарымһаҡ теше менән 1 балғалаҡ сәскә балын сәйнәргә. Дауаны көнөнә өс тапҡыр ҡабатларға.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

*✓ Ошо мәл тамаша ҡылғандарға шул тиклем ныҡ тәьҫир итә: һәр орандан, һәр көй тулҡынынан йөрәккә рух өҫтәлә бара, өҫтәлә бара. Ә балаларҙың үҙҙәренең рухланыуын, баштарын текә сөйөп атлап үтеүҙәрен күрһәгеҙ ине!*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Йәй мәлендә балалар ял итергә тейеш - был беҙҙең республикала дәүләт кимәлендәге төрлө ҡарарҙар, бойороҡтар, сығымдар менән нығытылған төп ҡағиҙәгә әйләнгән. Әле бына Башҡортостандың 2473 сәләмәтләндереү лагерында икенсе йәйге смена тамамланып килеүе, уларҙа 153 меңдән ашыу бала ял итеүе тураһында хәбәр иттеләр БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәтенән. Ә беренсе йәйге сменала иһә 2607 республика учреждениеһында 150 меңдән ашыу бала ял иткән. Ошо уҡ министрлыҡ мәғлүмәттәре буйынса, лагерҙарҙа ял иткән балаларҙың 86 процентында ыңғай һөҙөмтә билдәләнгән.**

# ЯЛ ИТКӘНДӘ ЛӘ...

## туған мөхитеңдә бул икән

Әбына беҙ бер генә лагерҙың һөҙөмтәлелеге тураһында һүҙ алып бармаҡсыбыҙ. Ул - һәләтле балаларға белем биреү һәм һауыҡтырыу йүнәлешендә эшләүсе "Йәйләү" профилле ял итеү үҙәге тураһында булыр. БР Мәғариф министрлығы уның эшен быйыл Ейәнсура районында ойошторҙо. Республикала 14 йыллап эшләп килеүсе "Йәйләү"ҙең программаһы бик үҙенсәлекле. Балалар алдына башҡорт халҡының мәҙәниәте, тарихы, бөгөнгөһө, йолалары, ял иткән төбәктең тарихы, легендалары, шәхестәре менән танышыу, балалар уйындарын өйрәнеү маҡсаты ҡуйыла. Ошо белем аша йәш быуында тыуған илгә, тыуған Башҡортостанға, туған телгә һөйөү һәм ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләнә. Бындағы эш һәм тәрбиә һөҙөмтәһе шундай: милли традицияны өйрәнеү нигеҙендә баланың рухи сәләмәтлегенә өлгәшелә; Башҡортостан Республикаһына исем биргән башҡорт халҡының тарихына, теленә, мәҙәниәтенә, традицияларына һөйөү, ихтирам уятыла; балаларҙың бик күп һәләттәре асыла.

"Йәйләү"гә ял итергә килгән балалар тәүге көндә үк йәшенә ҡарап төркөмдәргә бүленә һәм һәр төркөмгә башҡорт ырыуы атамалары ҡушыла. Был юлы иң өлкән балалар төркөмө - "Юрматы", иң кескәйҙәре "Тамьян" ырыуы исемен йөрөттө. Быйыл "Йәйләү" Ейәнсура районында үткәс, "Үҫәргән" ырыуы йәйләү хужалары тип иғлан ителде. Балалар шул көндө үк үҙ ырыуының йырын йырларға, оранын, ағаһын, ҡошон, батырын күмәкләп әйтергә өйрәнде. Бынан һуң инде һәр ырыу, рәттәргә теҙелеп, ашарға барһалар ҙа, экскурсияларға сыҡһалар ҙа, йылғаға һыу инергә төшһәләр ҙә - һәр ерҙә ырыу йырын йырлап, орандарын ҡысҡырып үтәсәк. Ошо мәл тамаша ҡылғандарға шул тиклем ныҡ тәьҫир итә: һәр орандан, һәр көй тулҡынынан йөрәккә рух өҫтәлә бара, өҫтәлә бара. Ә балаларҙың үҙҙәренең рухланыуын, баштарын текә сөйөп атлап үтеүҙәрен күрһәгеҙ ине!

Балалар "Йәйләү"гә килгәндең тәүге көнөнән халҡыбыҙ йолаларын үтәй, өйрәнә башлай. Мәҫәлән, ҡунаҡ ҡаршылау йолаһы. Беҙҙә ҡунаҡтарҙы икмәк һәм тоҙ менән ҡаршылау ғәҙәткә ингән. Берҙән, изге икмәк өҫтөнә тоҙ йә башҡа нәмә ултыртыу, аяғөҫтө ризыҡ ейеү - оло гонаһ һәм әҙәпһеҙлек. Икенсенән, алыҫтан килгән ҡунаҡ йыуылмаған ҡулы менән икмәк семтеп ҡабырға тейеш. Бына ошондай дөрөҫ булмаған йолаларға төҙәтмә индерелә "Йәйләү"ҙә. Бер ырыу балалары икенсе ырыу балаларын майҙанда һыуһын менән, йәғни һыу, ҡымыҙ, һут, айран менән ҡаршы ала һәм шулай ти: "Сарсап килгәнһегеҙҙер, тамағығыҙҙы сылатып, һыуһынығыҙҙы баҫып алығыҙ".

"Йәйләү"ҙә тәрбиәүи һабаҡтар бихисап, уларҙы һанап бөтөү мөмкин дә түгел. Бер-нисәһен генә әйтеп үтәйек. Балаларҙың йәйләүҙәге һәр аҙымы, һәр сығышы, тәртибе, һөйләшеүе, аралашыуы мәрәйҙәр менән баһалана. Мәрәйҙәр баланың матур йырлауына, бейеүенә йәки шиғыр һөйләүенә генә түгел, башҡорт телендә матур итеп һөйләшеүенә ҡарап та ҡуйыла. Әгәр ҙә бала телмәрендә рус һүҙе ҡыҫтыра икән, тимәк, уның мәрәйҙәре кәметелә. Шулай балаларҙың иғтибары үҙ туған теленә, үҙ асылына, үҙ моңона йәлеп ителә.

Тағы бер тәрбиә сараһы. Көн дә иртән балалар линейкаға йыйыла. Төрлө сараларҙың һөҙөмтәләре, буласаҡ саралар тураһында һөйләшеп алғандан һуң, "аукцион" иғлан ителә. Балаларҙың кистән ҡайҙалыр ташлап киткән, юғалтҡан әйберҙәрен тәрбиәселәр йыйып алып килеп, уларҙы аукционға ҡуя. Бала үҙ әйберен "Йәйләү"ҙә өйрәнгән ниндәйҙер һөнәрен күрһәтеп алырға тейеш. Быныһы ла балаларҙы йыйнаҡлыҡҡа, яуаплылыҡҡа өйрәтеү өсөн бик һәйбәт уйланылған сара.

Балалар менән тәбиғәт ҡосағына сығыу - шулай уҡ "Йәйләү" программаһының айырылғыһыҙ бер өлөшө. Тәбиғәт менән аралаша, үлән-сәскәләрҙе, уларҙың атамаларын өйрәнә, ҡоштар сутылдауын тыңлай балалар, һәр күргән-ишеткәне тураһында үҙ фекерҙәрен әйтеп ишеттерә. Был дәрестәрҙе башлыса "Йәйләү" ағинәйе Мәрйәм апай Бураҡаева үткәрә. Бына ул бер ромашканы өҙөп алып, балаларҙан был сәскәнең башҡортса исемен әйтеүҙәрен һорай. Бер бала ла белмәй. "Эй, балалар, - ти Мәрйәм апай, - был сәскәнең шундай матур башҡортса исемен юғалтып ҡуйбыҙмы инде былай булғас?" Балаларҙың барыһы ла, ҡыҙыҡһынып, был сәскәнең башҡортса әйтелешен көтә. "Болангүҙ" уның исеме. Ҡарағыҙ әле, таждары эсендәге һары нөктә хас та болан күҙҙәре ҡарап торғандай..." Әлбиттә, был дәрес, был һабаҡтар ғүмергә иҫендә ҡаласаҡ баланың. Сәскәнең исеме лә онотолмаясаҡ.

"Йәйләү"ҙә ойошторолған һәр уйын башҡорт халыҡ ижады менән бәйле һәм баланы башҡорттоң рухиәт донъяһына ылыҡтыра. Мәҫәлән, башҡа лагерҙарҙа ял итеүсе балалар белә: уларҙа "Нептун" тигән ҡайҙандыр ете диңгеҙ аръяғынан индерелгән һыу һибеш уйынын атҡармай ҡалмайҙар. "Йәйләү"ҙә уны "Заятүләк менән Һыуһылыу" уйыны итеп үткәрәләр. Бына Һыуһылыу яр ситендә сәстәрен тарап ултыра. Ситтә күҙәтеп тороусы Заятүләк ипләп кенә килеп, Һыуһылыуҙың сәстәрен урап тотоп ала. "Ебәр, егет, сәстәремде. Мин - һыу ҡыҙы, ебәр мине һыу аҫты батшалығыма. Әйҙә, мин һинең үҙеңде лә алып китәм", - ти Һыуһылыу. "Юҡ, Һыуһылыу, мин ерһеҙ, Балҡантауһыҙ йәшәй алмайым", - ти Заятүләк. Һыуһылыу китергә итә, Заятүләкте лә үҙе менән һыу төбөнә тарта башлай. Бер төркөм һыу ҡыҙҙары Һыуһылыуға ярҙамға ташлана. Был хәлде күреп, Заятүләктең дуҫтары ярҙамға килә. Китә үҙ-ара һыу һибешеү, һыуға сумырыш, һыу ҡойондорош. Аҙағынан Заятүләк Һыуһылыуҙы ярға алып сыға... Был уйын-әкиәттең ошондай сиселеше бала күңеленә еңеү тойғоһо ла, Ер балаһы булып йәшәү өсөн ғорурлыҡ та, шулай уҡ әллә күпме ҡыуаныс-шатлыҡ та һала бит.

"Йәйләү"ҙәге һабаҡтарҙың һөҙөмтәләрен мин шәхсән үҙемдең ейәнсәрҙәремдә күрҙем. Тыуған мөхиттән алыҫта, Мәскәүҙә йәшәп ятыусы ейәнсәрҙәрем - ун йәшлек Дилбәр менән һигеҙ йәшлек Сәлимә ял итте был юлы унда. Әлбиттә, уларға башҡорт мөхите былай ҙа ят түгел. Ғаиләлә тик башҡортса һөйләшәләр, башҡортса китаптар уҡыйҙар, көн-төн башҡорт музыкаһы яңғырап тора. Йәй буйы Башҡортостанда ял итәләр. Рәми Ғариповтың "Туған тел" шиғырын яттан һөйләп йөрөйҙәр. Ә шулай ҙа уларға "Йәйләү"ҙәге аралашыу етмәгән икән, тигән һығымтаға килено.

**(Дауамы 9-сы биттә).**



*ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...*

**Батша хөкүмәтенең колониаль сәйәсәте Рәсәйҙең рус булмаған халыҡтары араһында төрлө рәүештә үткәрелә. Ул сәйәсәттә дин мәсьәләһе ҙур урын биләмәй. Хөкүмәт теге йәки был осорҙа, алдына ҡуйылған маҡсаттан сығып, колониаль сәйәсәттең ысулдарын да, ағыштарын да үҙгәртеп тора. Батша хөкүмәтенең Башҡортостандағы бөтә феодализм осорондағы (XVI быуаттың икенсе - XIX быуаттың беренсе яртыһы) дини сәйәсәте ошоға тиклем махсус өйрәнелмәне. Революцияға тиклем йәшәгән тарихсылар тарафынан был мәсьәләнең Ырымбур-Өфө епархияһы эшмәкәрлеге, Өфөлә мосолман Диниә назаратын асыу, Иҙел (Волга) буйы һәм Башҡортостан мәжүсиҙәрен һәм мосолмандарын суҡындырыу кеүек яҡтар ғына тикшерелде. Был мәҡәләлә батша хөкүмәтенең дини мәсьәләләр буйынса сәйәсәтенең мәғәнәһен асыу, уны тормошҡа ашырыу юлдарына туҡталмаҡсымын.**

# СУҠЫНДЫРЫУ СӘЙӘСӘТЕН...

## башҡорттар ҡабул итмәгән



### Беренсе осор

Батша хөкүмәтенең дини мәсьәләләр буйынса сәйәсәтен дүрт осорға бүлергә була. XVI быуаттың икенсе яртыһын - XVII быуаттың 80-се йылдарын үҙ эсенә алған беренсе осорҙоң йөкмәткеһе шул: башҡорттар рус дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылған саҡта Иван батшаның башҡорт ырыу башлыҡтары менән килешкән шарттарын хөкүмәттең бер һүҙһеҙ үтәүе. Бында төп сәбәп булып батшаларҙың ул ваҡытта әле дәүләттә абсолют йәки сикләнмәгән власҡа эйә булмағанлығы торалыр, күрәһең. Әкренләп, самодержавие ойоша башлаһа ла, сиркәү власының батша власына ҡаршы тороуы дауам итә. Крайҙы колонизациялаштырыу башлана ғына әле, бер нисә ҡәлғә-ҡала ғына төҙөлгән саҡ. Дворяндар ҙа көсһөҙ, улар ҡалалар тирәһен генә биләй. Православие сиркәүе лә дүрт монастырь һәм 30-40 ғибәҙәтхана ғына һалып өлгөргән. Шулай уҡ крәҫтиәндәр ҙә күпләп күсенә башламаған. Былорҙың бөтәһе лә башҡорттарҙың аҫабалығын нығытырға мөмкинлек бирә. Халыҡ йыйындары, аҡһаҡалдар идараһы һаҡланып килә. Шул уҡ ваҡытта ислам дине лә ныҡлап тамыр йәйә.

### Икенсе осор

Сәйет Садир етәкселегендәге ихтилал (1681 йыл) башланғандан алып 1735-1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалына тиклемге ваҡытты үҙ эсенә ала. Был осор Башҡортостанда батша хөкүмәтенең әүҙем дини сәйәсәтенең башланыуы, Рәсәйҙә самодержавиеның нығыныуы, батшаның сикләнмәгән власҡа эйә булыуы менән ныҡ бәйле.

Дини иҙеүҙең башы дәүләт закондарында яҡшы күренә. 1681 йылдың 15 февралендәге указ менән суҡынғандарға өҫтөнлөктәр бирелә, өҫтәүенә эш хаҡы ла вәғәҙә ителә. 1681 йылдың 16 майындағы указ суҡыныуҙан баш тартҡан татар мырҙаларын ер биләмәләренән мәхрүм итә. 1681 йылда Өфөлә махсус епископ тәғәйенләнеүе лә ошолай ҡабул ителә. Башҡа дин кешеләрен христианлыҡҡа күсерергә бойороҡ бирелеүе хаҡындағы хәбәр 1681-1684 йылдарҙағы башҡорт ихтилалының башланыуына төп сәбәп була. Башҡорттарҙың хәрәкәтен һүлпәнәйтеү маҡсатында батша хөкүмәте 1682 йылдың 6 июнендә махсус грамота баҫып сығарырға мәжбүр була: "...такого нашего указа о крещении, чтоб крестить неволею, не бывало и ныне нет. И вам бы о том ни о чем не сумневатца". Ихтилалды тар-мар иткәс тә, христиан миссионерҙарының эше уңышлыраҡ барһын өсөн, суҡынғандарға өҫтөнлөктәр биреүҙе дауам итәләр. Атап әйткәндә, бер указ буйынса яңы суҡынғандарҙы холоплыҡҡа күсереү тыйыла. Шул уҡ ваҡытта батша хөкүмәте христиан булмаған халыҡтарҙың дини тойғоларын рәнйетмәй генә, "изге динде" ирекле рәүештә ҡабул итеү йүнәлешен тоторға тырыша: "которые крестятся, и к тем держать ласку и привет, чтобы на тех смотря и иные православной веры пожелали".

Төньяҡ һуғышы осоронда - 1700-1721 йылдарҙа - аҡсаға мохтажлыҡ кисергән Петр хөкүмәте ошо ауыр хәлдән сығыу юлын феодаль һалымдарҙы артабан арттырыуҙа күргән. Рус крәҫтиәндәренең һалымы ике тапҡырға артҡан. Башҡорттар ҡаҙнаға ҡиммәтле йәнлек тиреләре һәм бал менән яһаҡ түләгән, хәрби хеҙмәт үтәгән. Бынан тыш, уларға төрлө өҫтәлмә һалымдар индерелгән.

Шулай итеп, һалымсыларҙың "эшмәкәрлеге", халыҡтан көлөү 1704-1711 йылдарҙа барған башҡорттар ихтилалының башланыуына сәбәп булған. Башҡорттарҙың милли азатлыҡ хәрәкәте һигеҙ йылға һуҙыла. Баш күтәреүселәр, нигеҙҙә, православие ғибәҙәтханаларын ҡыйрата. 1709 йылға тиклем Ҡаҙан һәм Өфө өйәҙҙәрендә улар тарафынан 75 сиркәү яндырыла. Ахырҙа батша хөкүмәте башҡорттар өсөн яңы һалымдарҙан баш тартырға мәжбүр була. Бер үк ваҡытта православиены ҡабул иткәндәргә өҫтөнлөктәр булдырыла: улар (1720 йылдың 15 сентябрендәге указ менән) өс йылға йән башына һалынған һалымдан һәм (1722 йылдың 1 ноябрендәге указ менән) ғәскәргә алыныуҙан азат ителә. Шулай ҙа миссионерҙар бик ҙур уңышҡа өлгәшә алмай: XVIII быуаттың тәүге яртыһында Башҡортостанда суҡындырылғандар 300 йорт ҡына тәшкил иткән. Мосолман руханиҙарының мәжүсиҙәр араһындағы эшмәкәрлеген туҡтатыу өсөн 1729 йылдағы указ менән мосолмандарҙың миссионерлыҡ эше үлем язаһы менән тыйыла.

### Өсөнсө осор

1736-1789 йылдарҙы үҙ эсенә ала, йәғни 1736 йылдың 11 февралендәге указ баҫылғандан алып Өфөлә I Ырымбур мосолман Диниә назараты асылғанға тиклемге осор. Батша хөкүмәтенең Башҡортостандағы ислам дине һәм уның институттарына ҡаршы һөжүменең иң ҡыҙыу мәле ошо осорға тап килә. Әйтергә кәрәк, мәжүси һәм мосолмандарҙы суҡындырыу тыныс юл менән дә, мәжбүри юл менән дә үткәрелә.

Батша хөкүмәтенең 1736 йылдың 11 февралендәге указы Башҡортостанда үҙенең сикһеҙ хакимлығын нығытыу өсөн программа була. Ошо маҡсатҡа өлгәшеү һәм башҡорттарҙың баш күтәреүенән һаҡланыу ниәтендә, Башҡортостанды хәрби нығытмалар менән уратып алыу өсөн Яйыҡ, Зәй, Шишмә йылғалары буйлап һәм Себерҙә нығытылған сик буйы селтәрен төҙөү көсәйтелә. Шулай уҡ үрҙә әйтелгән указ һәм башҡа акттарҙа мәжүсиҙәр араһында ислам динен таратыу һәм яңы мәсеттәр төҙөү, дини мәктәптәр асыу тыйыла. Иң юғары мосолман руханиҙары һаны ла ҡыҫҡартылып, һәр даруғаға берәр ахун ғына ҡалдырыла. Шәриғәт хоҡуҡтары ла ҡыҫыла. Мосолман руханиҙарының эшмәкәрлеге урындағы администрация күҙәтеүе аҫтына алына.

Башҡорттарҙың 1735-1740, 1755 һәм 1773-1775 йылдарҙағы ихтилалдары барышында ла, улар аяуһыҙ баҫтырылғас та, хөкүмәт дини мәсьәлә буйынса программаһын тормошҡа ашырыуын дауам итә, хатта көсәйтә төшә. Атап әйткәндә, баш күтәреүселәрҙең балаларын һәм ҡатындарын суҡындырыу һәм Башҡортостандан ситкә алып китеү хоҡуғы менән һатыу һәм һатып алыу рөхсәт ителә. Башҡорттарҙы суҡындырыу 1738 һәм 1776 йот йылдарында айырыуса көсәйә. Ихтилалдарҙы мәрхәмәтһеҙ баҫтырыу һөҙөмтәһендә башҡорттар бөлгөнлөккә төшә, аслыҡ башлана, ә власть әһелдәре һәм миссионерҙар ошонан файҙалана ла инде: беренсенән, суҡынған өсөн бушлай икмәк бирелә, икенсенән, фәҡир башҡорттар суҡындырыу шартына ризалашып, балаларын һәм ҡатындарын икмәккә алыштыра, өсөнсөнән, үҙҙәрен-үҙҙәре һатып христианға әйләнеү осраҡтары күҙәтелә. Шулай уҡ карателдәргә суҡындырыу хоҡуғы менән әсир ихтилалсылар таратып бирелә.

Сенаттың 1742 йылдың 9 ноябрендәге указы менән яңы мәсеттәрҙең бөтәһен дә емерергә бойороҡ бирелә. Һөҙөмтәлә, 536 мәсеттең 418-е юҡҡа сығарыла. Ә 1743 йылдағы указ менән яңы суҡындырылғандар йәшәгән ауылдарҙа мәсет төҙөү бөтөнләй тыйыла.

Миссионерлыҡ эшмәкәрлеге уңышлыраҡ булһын өсөн ҡайһы саҡта көсләп суҡындырыуҙы туҡтатып торалар, 1744 йылдан христиан миссионерҙарына берәү ҙә ҡаршылыҡ күрһәтергә тейеш булмаған. Улар мосолман һәм мәжүсиҙәр ауылдарында йөрөп, Мөхәммәт менән Ғайса бәйғәмбәрҙе (Иисус Христосты), Ҡөрьән менән Тәүратты сағыштырып, тәүгеләрен яманлап, икенсеһен маҡтап йөрөгәндәр.

Әйтергә кәрәк, суҡындырылған башҡорттарҙы, ғәҙәттә, Башҡортостандан ситкә сығарып, крепостной крәҫтиән сифатында алпауыттарға таратып йә һатып биргәндәр. Шул сәбәпле Рәсәйҙең күп төбәктәренә таратылған керәшен башҡорттар билдәле бер этнос вәкиле булараҡ юҡҡа сығырға - русҡа әйләнергә мәжбүр ителгән. Ә бына керәшен татарҙарға һәм мәжүсиҙәргә мөнәсәбәт башҡасараҡ булған. Керәшен татарҙарын Ҡаҙан губернаһынан ситкә сығарһалар ҙа, йыш ҡына Башҡортостанға килтерер булғандар һәм уларҙан ҙур-ҙур ауылдар ойоштор ғандар. Мәҫәлән, Ноғайбәк ҡәлғәһе, Баҡалы, Бөгөлсән, Мәләүез һәм Петровское ауылдары. Уларҙы казактар сословиеһына индергәндәр һәм башҡаларҙан айырғандар. Улар бер төрлө эш башҡарып, бер идара аҫтында булғандар.

1735-1740 йылдарҙа ғына башҡорттар араһынан, язаланғандарынан тыш, 3 236 кеше флотҡа ебәрелә, 8 380 ҡатын-ҡыҙ һәм бала-саға Рәсәйҙең эске губерналарына оҙатыла.

### Дүртенсе осор

XVIII быуаттың 80-се йылдарына батша хөкүмәтенең Башҡортостандағы дини сәйәсәтенең һуңғы осоро башлана, ул 1861 йылға тиклем дауам итә. Ошо осорҙа хөкүмәт, ислам диненә ҡарата мөнәсәбәтен ҡырҡа үҙгәртеп, 1789 йылдың декабрь башында Өфөлә Ырымбур мосолман Диниә назаратын асып, мосолман руханиҙарының эшмәкәрлеген законлаштыра.

Дини сәйәсәттең былай үҙгәреүенә эске һәм тышҡы факторҙар ҙа йоғонто яһай. Йәғни башҡорт һәм мишәрҙәрҙең хәрби казачий сословиеға күсеп, батша хөкүмәтенең эске (каратель) һәм тышҡы (баҫып алыу) сәйәсәтен әүҙем үткәреүсегә әйләнеүе. Түрәләренең хәрби һәм граждандар чиновниктары булып китеүе, XVIII быуаттың икенсе яртыһындағы рус-төрөк һуғыштары илдәге дини сәйәсәттең үҙгәреүендә үҙ ролен уйнай. Екатерина II хөкүмәте Төркиәнең Рәсәй мосолмандарына дини һәм сәйәси йоғонтоһон юҡҡа сығарырға ынтыла. Уның ирекле дин тотоу тураһында указ сығарыуы һәм Өфөлә Диниә назаратын асыуы күрше ҡаҙаҡ халҡын Рәсәйгә ылыҡтырыу маҡсатында эшләнә. Ирекле дин тотоу тураһында указ сыҡҡас, яңы мәсеттәр төҙөлә, улар эргәһендә мәҙрәсәләр асыла. Батша хөкүмәтенең бер нисә баҫҡыс итеп ҡайта-ҡайта үткәрелгән дини сәйәсәте башҡорттарҙың ҡаты ҡаршылығына осрай. Суҡындырыуҙы улар үҙҙәренең рухи донъяһынан яҙыу тип аңлай. Башҡорттарҙың ҡораллы көрәше уларҙың динен генә түгел, телен дә, мәҙәниәтен дә, халыҡ булараҡ үҙаллылығын да һаҡлап алып ҡалырға ярҙам итә.

**Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.**

**✓ Әлбиттә, хәүефле замандa йәшәйбеҙ. Ләкин баланы яныҒыҙҙан ебәрмәйенсә, һәр ваҡыт ҡурсалап тороуҙан ғына был хәүефте юҡҡа сығарып булмай. Тормош бар ерҙә лә бер төрлө.**



**Бөгөнгө көн йәштәренең мөмкинлектәре сикһеҙ. Мәҫәлән, улар күңеле теләгән уҡыу йортонда белем алыу бәхетенә эйә. Йылдан-йыл Рәсәйҙең, сит илдәрҙең төрлө ҡалаларына уҡырға барыусылар һанының артыуы был мөмкинлек менән күптәрҙең уңышлы файҙаланыуы хаҡында һөйләй. Ләкин уларҙың һанын тағы ла арттырыу мөһим, ти Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларында уҡыусы студенттар һәм аспиранттар Ассоциацияһы етәксеһе Азат БАДРАНОВ. Башҡорт дәүләт университетенең Хоҡуҡ институтын тамамлап, бөгөнгө көндә Мәскәү ҡалаһында бер юлы аспирантурала һәм магистратурала белемен камиллаштырып йөрөүсе егет менән бөгөнгө әңгәмәбеҙ ошо мәсьәләне хәл итеү юлдары хаҡында булыр. Шулай уҡ әңгәмәбеҙ башҡа төрлө темаларҙы ла үҙ эсенә алды.**

### Ассоциация эшмәкәрлеге

Белемдең ҙур көс икәнлеген күптәр яҡшы аңлай һәм сифатлы белем алырға тырыша. Һуңғы йылдарҙа йәштәрҙең Башҡортостанда ғына түгел, ә Рәсәйҙең башҡа ҡалаларында һәм хатта сит илдә белем алыу мөмкинлеге лә күпкә юғары. Беҙгә килгән һәр анкета ентекле өйрәнелә һәм абитуриенттар мотлаҡ рәүештә Өфөгә әңгәмәгә саҡырыла, сөнки күҙмә-күҙ ҡарап аралашҡанда ғына кешенең булмышын төшөнөргә, уның уй-фекерен аңларға була. Беҙ, рә уҡыусыларҙы һәм ата-әсәләрҙе туранан-тура Ассоциацияға мөрәжәғәт итергә саҡырабыҙ. ҡурҡа. Ләкин нимәнән ҡурҡырға? Әлбиттә, хәүефле замандa йәшәйбеҙ. Ләкин баланы яныҒыҙҙан ебәрмәйенсә, һәр ваҡыт ҡурсалап тороуҙан ғына был хәүефте юҡҡа сығарып булмай. Тормош бар ерҙә лә бер төрлө һәм үҙен лайыҡлы тотҡан, аҡылы булған һәм үҙенә лә, башҡаларға ла хөрмәт менән ҡарай белгән кеше хәлле кешеләрҙең генә балалары белем алырға мөмкин, сөнки унда уҡытыу үтә лә ҡыйбатҡа төшә, тип фекер йөрөтә. Ләкин был дөрөҫлөккә тап килмәй, сөнки Мәскәүҙә, әгәр ҙә фатир өсөн түләп йәшәмәһәң, Өфө йәки республиканың башҡа берәй ҡалаһындағы кеүек үк күләмдә аҡса тотонола. Әйтергә кәрәк, бөгөнгө көндә Мәскәү һәм Санкт-Петербургта белем алыусы студенттарҙың күбеһе ауылда тыуып үҫкән, ата-әсәһе ҙур урын биләмәгән йәштәр. Шулай уҡ ҙур ҡалаларҙа уҡыуға зарар килтермәҫтәй график менән эш урыны табыу ҙа еңелерәк һәм күпселек студенттар, беренсе курсты тамамлағас, был мөмкинлек менән файҙалана.

хәл итә, ә бындай сифаттар тормошта ҙур роль уйнай.

Йәштәрҙәге тағы ла бер көслө стереотип - шикләнеү. Үҙенең көсөнә, тирә-яҡҡа, башҡараһы эшенә, хатта үҙенең хыялына шикләнеп ҡараусылар күп. "Ә минең ҡулымдан килерме һуң был эш?", "Уҡый алырмынмы?", "Мин булдыра алырмынмы?" һәм башҡа ошондай шикләнеүҙәр күптәрҙең юлында кәртә булып тора. Икенсе берәү булдыра бит, ә ни өсөн һинең хәлеңдән килмәҫкә тейеш? Үҙ көсөңә ныҡлы ышанып йәшәргә кәрәк.

Тағы ла мин йәштәрҙе хыял тарлығынан ҡотолорға саҡырам. Мәҫәлән, мәктәп уҡыусыһы ауылына яҡын ҡала йәки күңеленә ятмаһа ла, уҡырға инеү еңелерәк булған

# ИЛҺӨЙӘРЛЕКТЕҢ...

## күңелдә булыуы шарт



Беҙҙең Ассоциацияның эшмәкәрлеге Башҡортостандың төрлө төбәгендә урта мәктәпте тамамлаған егет һәм ҡыҙҙарҙың Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларының юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеүенә булышлыҡ итеүгә ҡайтып ҡала. 2009 йылдан алып эшләгән Ассоциация йылдан-йыл күберәк абитуриентҡа атап үтелгән ҡалаларҙа уҡыу мөмкинлектәре аса. Мәҫәлән, 2009 йылда беҙҙең ярҙам менән 100 кеше Мәскәү һәм Санкт-Петербург юғары уҡыу йорттары студенты булыуға өлгәшһә, быйыл иһә был һан 200-250-гә етә. Ойошма әлегә техник уҡыу йорттары менән хеҙмәттәшлек итә, ләкин киләсәктә төрлө тармаҡта белгестәр әҙерләүсе уҡыу йорттары менән дә эшмәкәрлекте яйға һалырбыҙ, тип ышанам.

Әйткәндәй, Мәскәү һәм Санкт-Петербургтағы юғары уҡыу йорттары беҙҙең республиканан килеүсе абитуриенттарға йылдан-йыл бюджет урындарын күберәк бүлә, сөнки бөгөнгө көндә уларҙа уҡып йөрөүсе студенттар уҡыу йәһәтенән дә, тәрбиә яғынан да үҙҙәрен лайыҡлы тота, башҡаларға өлгө булып тора. Шуға күрә лә уҡыу йорттары етәкселеге үҙҙәренең студенттары иҫәбендә нәҡ Башҡортостандан күберәк абитуриенттар күрергә теләй.

Ассоциацияға республика мәктәптәрен тамамлаусы һәр кем мөрәжәғәт итә ала. Өҫтөнлөктө егеттәргә бирһәк тә, ҡыҙҙарға ла баш тартмайбыҙ. Ассоциация аша уҡырға инергә теләгәндәр беҙҙең тарафтан йыл да район һәм ҡала хакимиәттәренә ебәрелгән анкеталарҙы тултырып, беҙгә ебәрергә тейештәр. Тик ҡайһы бер хакимиәттәрҙең был эшкә битарафлыҡ күрһәтеүе һөҙөмтәһендә күп мәктәптәргә анкета бланкылары барып етмәй һәм уҡыусылар был мөмкинлекте ҡулдан ысҡындыра. Шуға кү-

мәҫәлән, тәү сиратта, кешенең рухлы булыуына иғтибар итәбеҙ. Шуға күрә республиканың патриоты булған, Башҡортостандың тарихын, халҡының үткәнен белгән, бөгөнгөһөнән ситтә булмаған һәм киләсәктә үҙен республикаһы мәнфәғәте өсөн эшләйәсәк кеше итеп күҙ алдына килтереүсегә Ассоциация ишеге һәр саҡ асыҡ.

Ләкин беҙҙең ойошма аша Мәскәүгә йәки Санкт-Петербургка уҡырға китеүселәр бындай мөмкинлекте республика халҡы тарафынан үҙҙәренә бирелгән аванс итеп аңларға бурыслы. Йәштәр халҡы һәм республикаһы күрһәткән был ышанысты яҡшы белеме, тәртибе, һәйбәт уҡыуы һәм эшләүе, үҙҙәренән һуң килгән быуындарға эскерһеҙ ярҙам күрһәтеүе менән ҡапларға тейеш.

***Ошо йылдар эсендәге эшмәкәрлек ата-әсәләр һәм йәштәргә ҡағылышлы башҡа төрлө һығымталар эшләргә лә мөмкинлек бирҙе. Мәҫәлән, абитуриенттар менән аралашыу уларҙың коммуникацион һәләттәренең бик түбән булыуын күрһәтә. Уларҙа йә бөтөнләй һөйләшеү ҡеүәһе юҡ йә үҙ фекерен матур һәм аңлайышлы итеп әңгәмәсәһенә еткереү һәләте түбән. Шулай уҡ ҡайһы берәүҙәр тәрбиә яғынан да аҡһай, тип әйтергә була, сөнки улар һаулыҡ һорашыу һәм һаубуллашыу кеүек ябай ғына ғәмәлде лә белмәй. Ә ата-әсәләргә килгәндә, күптәре балаларына үҙаллылыҡ бирмәй. Улар барлыҡ һорауҙарҙы ла үҙҙәре бирә, хатта анкетаны ла үҙҙәре тултыра. Ошондай бәләкәй генә эште лә үҙе башҡара алмаған йәш кеше сит-ят ҡалала нисек йәшәргә һәм уҡырға уйлай һуң?***

### Ҡалыптар бар

Ассоциацияға федераль үҙәк яғынан да, юғары уҡыу йорттары етәкселеге тарафынан да ярҙам күрһәтелә. Тик эштең әүҙемләшеүе, тәү сиратта, халыҡтың аңлауына һәм ярҙамына ҡайтып ҡала. Ҡыҙғанысҡа күрә, беҙҙең халыҡта төрлө стереотиптар көслө. Беренсенән, ата-әсәләр балаларын үҙ эргәһенән алыҫҡа ебәреүҙән хәүефтәргә юлыҡмай. Был мәсьәләгә икенсе юҫыҡтан да ҡарау мөһим. Кемдер донъяның тышҡы хәүефенән түгел, ә үҙенең булдыҡһыҙлығынан шөрләй. Был осраҡта мин бар кешегә лә бер төрлө эске мөмкинлектәр бирелгән, айырма бары тик уны нисек ҡулланыуға ғына ҡайтып ҡала, тип әйтер инем.

Шулай уҡ күптәр Мәскәү йә Санкт-Петербургта бары тик

Йәнә күпселек ата-әсә балаһын мотлаҡ туғандар йәки таныштар булған ергә генә уҡырға ебәреү ҡулай, тип уйлай. Әлбиттә, сит яҡтарҙа таяныр кешең булыу оло терәк, булмаһа инде, быны ҙур фажиғәгә әйләндерергә ярамай. Бындай осраҡта кеше үҙаллылыҡҡа өйрәнә, кемдәндер нимәлер көтөп ятмай, ә үҙ көсө менән килеп тыуған мәсьәләләрҙе

өсөн һайланған уҡыу йорто тураһында түгел, ә Рәсәй, башҡа ҙур ҡалаларҙағы донъя кимәлендә билдәле уҡыу йорттары тураһында хыялланһын ине. Әлбиттә, был кемгәлер Айға осоуға тиң хыял булып күренәлер, ләкин теләк, тәүәккәллек һәм тырышлыҡ булғанда, барыһына ла өлгәшергә була. Иманым камил, һәр бер ауылда тиерлек Рәсәйҙең берәй ҡалаһында уҡып йөрөүсе студент бар. Улар һанын арттырыуға һин дә үҙ өлөшөңдө индерә алаһың.

Бына ошондай шикләнеүҙәрҙән, икеләнеүҙәрҙән ҡотолорға кәрәк хәҙерге замандың йәш кешеһенә. Әйткәндәй, һуңғы йылдарҙа был юҫыҡта ыңғай үҙгәрештәр бар. Был хаҡта беҙҙең ойошмаға мөрәжәғәт итеүселәрҙең күбәйеүе асыҡ һөйләй.

Ошо йылдар эсендәге эшмәкәрлек ата-әсәләр һәм йәштәргә ҡағылышлы башҡа төрлө һығымталар эшләргә лә мөмкинлек бирҙе. Мәҫәлән, абитуриенттар менән аралашыу уларҙың коммуникацион һәләттәренең бик түбән булыуын күрһәтә. Уларҙа йә бөтөнләй һөйләшеү ҡеүәһе юҡ йә үҙ фекерен матур һәм аңлайышлы итеп әңгәмәсәһенә еткереү һәләте түбән. Шулай уҡ ҡайһы берәүҙәр тәрбиә яғынан да аҡһай, тип әйтергә була, сөнки улар һаулыҡ һорашыу һәм һаубуллашыу кеүек ябай ғына ғәмәлде лә белмәй. Ә ата-әсәләргә килгәндә, күптәре балаларына үҙаллылыҡ бирмәй. Улар барлыҡ һорауҙарҙы ла үҙҙәре бирә, хатта анкетаны ла үҙҙәре тултыра. Ошондай бәләкәй генә эште лә үҙе башҡара алмаған йәш кеше сит-ят ҡалала нисек йәшәргә һәм уҡырға уйлай һуң? Әгәр ҙә ул урынындағы мөхиткә яраҡлаша,

йәмғиәт менән уртаҡ тел таба алмай, ярты йылдан ауылға ҡайтып төшһә, кем ғәйепле буласаҡ? Әлбиттә, ата-әсә лә ғәйепте үҙ иҫәбенә алып, һығымталар эшләргә тейеш.

## Ҙур ҡалала нисек юғалып ҡалмаҫҡа?

Ҙур ҡалаларға уҡырға барыусыларға, ғөмүмән, йәштәргә бер-нисә һүҙ әйткем килә. Тәү сиратта, ҡурҡмағыҙ. Беҙ берәүҙән дә кәм түгел, шуға күрә оялыу һәм тартыныу кеүек хистәрҙе ситкә алып ташлағыҙ. Үҙ-үҙегеҙгә бикләнмәгеҙ, күберәк аралашырға, яңы таныштар, дуҫтар табырға тырышығыҙ. Шулай уҡ, тәү сиратта, үҙегеҙҙең белем алырға килеүегеҙ хаҡында онотмай, белемегеҙҙе арттырыу һәм аң даирәһен киңәйтеү өҫтөндә әүҙем эшләгеҙ. Ниндәйҙер эшкә тотонор алдынан уның эҙемтәләре нисек булыры хаҡында уйлап эш итегеҙ, ә нимәлер килеп сыҡмаһа икән, бар донъяға үсегеп, ҡул һелтәп ҡуйырға түгел, ә ҡайҙа хаталанғанығыҙы аңларға тырышырға һәм киләсәктә файҙалы буласаҡ һығымталар эшләй белергә өйрәнегеҙ.

Һәр кем тормошондағы хәлваҡиғаға үҙе генә яуаплы - шуны онотмағыҙ һәм уңышһыҙлыҡтарығыҙҙы башҡа берәүҙең иңенә һалмағыҙ. Шулай уҡ һәр ваҡыт үҙегеҙҙе камиллаштырыу өҫтөндә эшләгеҙ, телдәр өйрәнегеҙ, төрлө түңәрәктәргә йөрөгөҙ, ғөмүмән, һәр яҡлап үсешегеҙ. Түгелгән көс, иртәме-һуңмы, үҙенең тос емештәрен бирәсәк.

## Киләсәккә нигеҙ бөгөн һалына

Халҡыбыҙ, республикабыҙ бөйөк тарихҡа эйә. Йәшәйешебеҙҙең тотороҡло һәм тыныс булыуы менән ул башҡа күп республикаларҙан айырылып тора. Башҡортостандың киләсәге ниндәй булыуы бөгөнгө йәштәрҙең белемле булыуына, уй-фекерҙәренең ниндәй юҫыҡҡа йүнәлеүенә бәйле. Халҡыбыҙҙың башҡа милләттәр араһында артабан да лайыҡлы урын биләп тороуы ла шул уҡ йәштәребеҙ иңендә. Шуға күрә беҙ белемле, аҡыллы, һәр эште ерenә еткереп үтәгән, үҙ һүҙе һәм эше өсөн яуаплылыҡ тоя белгән быуынды тәшкил итергә тейешбеҙ.

Быға өлгәшеүҙең бер юлы - ҙур ҡалала юғары белем алыу, сөнки бындай мегаполистарҙа уҡығандар масштаблы фекер йөрөтөүе менән айырылып тора. Улар тирә-яҡта барған хәл-ваҡиғаны төплөрәк аңлай, алыҫыраҡ күрә һәм һығымталар эшләй. Шулай уҡ республиканан ситтә уҡыусыларҙа илһөйәрлек хисе тағы ла көслөрәк дөрләй башлай. Йәнә Мәскәү йәки башҡа ҙур ҡалаларҙа белем алыусының аралашыу даирәһе лә киңерәк була, сөнки ул төрлө милләт вәкилдәре менән аралаша, уларҙың менталитетын төптәнерәк аңлай һәм артабанғы тормошта ошо донъяуи белемдәрен уңышлы ҡуллана.

Ҙур ҡалаларҙа белем алыусылар "Берҙәмлектә - көс" принцибының дөрөҫлөгөн яҡшыраҡ аңлай, сөнки унда яҡташтар бер-береһенә һәр саҡ ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер. Шулай уҡ улар тирә-яҡтағыларҙан ярҙам ғына алырға түгел, ә үҙҙәре лә терәк-таяныс булырға өйрәнә һәм ошо "команда" рухы уларҙа ғүмер буйына һаҡлана. Ә бөгөн яҡташына ярҙам итеүҙән баш тартмаған кешенең халҡына һәм иленә лә ныҡлы таяныс буласағына шик юҡ.

## Ситтә лә башҡорт булып йәшә

Мәскәү кеүек ҙур ҡалаларҙа белем алыу хаҡында һүҙ сыҡһа, күптәр "Ә ситкә уҡырға китеүселәрҙең барыһы ла, ҡулдарына диплом алғас, тыуған республикаларына ҡайтып эшләйәсәкме һуң?" тигән һорау бирә. Эйе, 100 проценты ла кире ҡайтмаясаҡ, кемдер уҡыған ҡалаһында, ә ҡайһылары иһә хатта сит илгә лә сығып китә. Ләкин үҙ илеңдең патриоты булыу, минеңсә, нәҡ республикала йәшәүҙе һәм эшләүҙе генә аңлатмай. Донъяның ниндәй мөйөшөндә булһаң да тыуған ереңде, халҡыңды һәм телеңде онотмай, башҡорт булып йәшәү, башҡорт балалары үҫтереү, милләттәштәренә хәлеңдән килгәнсә ярҙам ҡулы һуҙыу - бына ошо патриотлыҡтың төп нигеҙе лә инде. Шуға ла "Йәштәр мотлаҡ рәүештә республикаға ҡайтырға тейеш", тигән фекерҙе бик үк бүлешмәйем. Кемдер алыҫта йәшәп тә, тирә-яҡтағыларҙа үҙ милләте хаҡында матур уйҙар һәм фекерҙәр тыуҙыра ала икән, тимәк, уны үҙ иленең һәм халҡының патриоты, тип әйтергә була. Мәҫәлән, беҙ хеҙмәттәшлек алып барған күп уҡыу йорттарында Башҡортостандан сыҡҡан кешеләр эшләй һәм улар һәр ваҡыт беҙгә ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер, тимәк, уларҙың Мәскәүҙә уҡыуын кире баһалап булмай, сөнки улар үҙ тамырҙарын онотмай һәм хәлдәренән килгәнсә ярҙам итә. Улар араһында башҡорт ҡына түгел, ә төрлө милләт кешеләре бар, ләкин уларҙың барыһын да тыуған ерҙәренә булған һөйөү хисе берләштерә. Патриотлыҡ уларҙың күңелендә йәшәй.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Үҙ фекерен аныҡ һәм асыҡ итеп башҡаларға еткерә алыусы, һәр һүҙен инҡар итмәҫлек дәлилдәр менән иҫбатлап ҡуйыусы, ҡоро һүҙ менән аныҡ эштең айырмаһын яҡшы аңлаған йәштәребеҙ булғанда, киләсәгебеҙ ышаныслы ҡулдарҙа икәнлегенә яҡшы төшөнәһең. Ләкин улар ҙа ике төркөмгә бүленә: кемдер был сифаттарын бары тик үҙ тормошо өсөн яраҡлаштырһа, икенселәр иһә бар йәмғиәт мәнфәғәтен беренсе урынға ҡуя һәм оло эш башҡара. Нәҡ икенселәр рәтендә булған әңгәмәсемдең эшмәкәрлеге үҙенең тос емештәрен бирәсәгенә шик юҡ.**

**Гөлназ САФУАНОВА**
**яҙып алды.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ЯЛ ИТКӘНДӘ ЛӘ...

## туған мөхитеңдә бул икән



**(Башы 6-сы биттә).**

"Йәйләү"ҙә уларҙың теле, хәтер һандығы шул тиклем байыны: телмәрҙәренә ҡушыла торған рус һүҙҙәре төшөп ҡалды, һәр башҡорт ырыуы өсөн тәғәйенләп сығарылған йырҙарҙы ла, орандарҙы ла, башҡа атрибуттарҙы ла, әкиәтлегендаларҙы ла, башҡа шиғырҙарҙы ла шартлатып яттан һөйләргә өйрәнделәр. Беҙ булған көндө "Йәйләү"ҙә "Йоморо-йоморо йомғағым" конкурсы үтте. Һәр ырыу бер әкиәтте сәхнәләштереп күрһәтте. "Тамьян"дар сәхнәләштергән әкиәт-спектаклдә Сәлимә ейәнсәремдең әбей булып уйнағанын күргәс, аптырауҙан йығылып китә яҙҙым: аҡыллы, сабыр, матур башҡорт әбейе образына ингән дә киткән. Әлшәй районы Ҡыпсаҡ-Аҫҡар ауылынан килгән Тимур Шәрәфетдинов иһә бабай ролен, ә Өфө ҡыҙҙары Айсулпан Фәйзуллина менән Алтынай Ғәйнуллина наҙлы ғына әкиәт ҡыҙҙары ролен шул тиклем килештереп уйнаны! Башҡорт балаһы үҙ һәләтен, үҙенең илһөйәрлек, телһөйәрлек тойғоларын тап үҙ мөхитендә, үҙ тупрағында сәсергә тейеш шул, тигәнгә тағы бер тапҡыр инанылды.

Былары - үҙем күргәндәр, үҙем шаһит булғандар тураһында булды. Артабан "Йәйләү"ҙең тәрбиә эштәре буйынса директор урынбаҫары, педагогия фәндәре кандидаты Әлфиә Тимербай ҡыҙы Мәүлийәрова менән һөйләшәбеҙ.

- "Йәйләү"гә уҡыуҙа, үҙ районы, ҡалаһының йәмғәт тормошонда уңыш яулаған, олимпиада, конкурстарҙа еңгән һәләтле балалар һайлап алына,- тип һөйләп китте ул.- Улар менән эшләү енел дә, ауыр ҙа. Енел, сөнки улар алдарына ҡуйылған һәр һынауҙы енел үтәй. Ауыр, сөнки уларҙы көн дә яңы бер сара менән ҡыҙыҡтырып ҡына торорға кәрәк. Уларҙың һәр береһе лидер. Уларға ҡаты ҡағылырға, тупаҫ өндәшергә ярамай. Һәр аҙымдарын, һәр эшен баһалап барырға, уларға бала итеп түгел, үҙеңә тиң шәхес итеп ҡарарға кәрәк.

- Ошо балалар араһында һеҙҙе айырыуса һоҡландырғандар булғандыр, ундай балаларҙың ниндәй сифаттарын айырып күрһәтер инегеҙ?- тигән һорау тағы осона килә.

- Мәҫәлән, Өфөнөң 158-се башҡорт лицейында уҡып йөрөүсе Тимур Баянов тигән егетте алайыҡ. Ул бик белемле, халҡыбыҙ тарихын яҡшы белә. Ырымбурға экскурсияға барғайныҡ. Юл буйы Каруанһарай тураһында һөйләп барҙы. Ярҙамсыл. Ололарға ла, кеселәргә лә ихтирамлы. Аҡыллы, зиһенле, аңлы, һәләтле, тиҫтерҙәрен артынан әйҙәй, тыңлата белә. Позитив. Бер ваҡытта ла йөҙөн һытып йөрөмәй. Йөҙөн һытып йөрөгәндәргә ипләп кенә йоғонто яһай, уларҙы позитивҡа көйләй белә. Милләтте күтәрер ысын ир-егетте күрҙем мин уның йөҙөндә. Һәм ошонда бер һығымта ла яһаным: балаларҙы беҙ, ғәҙәттә, "Калай һәр яҡлап талантлы!" тип маҡтайбыҙ, ә уның аңы, кешелек сифаттары үҫешмәгән булыуы, уның сәме бары бер яҡҡа - үҙен күрһәтеүгә генә йүнәлдерелгән булыуы мөмкин. Ә бына Тимур бар яҡлап һәләтле, шул уҡ ваҡытта кешелек сифаттары уны бынамын тигән шәхес итеп үҫтергән...

Әлфиә Тимербай ҡыҙы тәжрибәле педагог, шулай уҡ ошо "Йәйләү"ҙе ойоштороуҙың башында торған кеше булараҡ, башҡа күҙәтеүҙәре менән дә уртаҡлашты, ҡайһы бер проблемаларҙы ла телгә алды: "Иң ҙур проблема - кадрҙар, - тине ул.- Мәғариф министрлығының "Йәйләү" программаһы буйынса эшләүсе берҙән-бер һәм уникаль профилле ял итеү үҙегенә тәрбиәселәрҙе, әйҙәүселәрҙе йәйл буйы әҙерләргә, һайларға кәрәк. Бында баларҙы ятраҡан, тәрбиә, туған тел, туған мәҙәниәт өсөн ысын мәғәнәһендә янып-көйгән педагогтар эшләргә тейеш. Шундай коллектив туплана башлағайны ул. Уларҙан тик һәүәҫкәр композитор Дамир Әҙелбаев, менән Мәрйәм Хәсәнова ғына тороп ҡалды. Улар бында баштан уҡ тиерлек эшләйҙәр һәм быйыл да оло таянысым булдылар. "Йәйләү" программаһының авторы Мәрйәм апай Бураҡаева ла быйыл йәйләүҙең ағинәйе булып, ҡуҙ-ҡолаҡ булып, ҡағыҙәләрҙең теүәл үтәлешен контроллап, ҡайһылыр урында төҙәтеп, хуплап йөрөнө һәм был беҙгә ҙур ярҙам булды. Лагерҙан бит балалар ғына түгел, тәрбиәселәр ҙә рухы күтәрелеп, күңеле байып ҡайта. Мин үҙем педагог булараҡ мөмкинлектәремде тормошҡа ашырыуҙан оло ҡәнәғәтләнеү алам. Үҙемдең нимәгә һәләтле булыуымды үҙ-үҙемә иҫбат итәм. Ошондай "Йәйләү" программаһы менән эшләгән лагерҙы йыл әйләнәһенә ойошторорға ине, тип хыялланам. Ниндәй ҙур шәхестәр тәрбиәләр инек беҙ унда!

Билдәле яҙыусы Мәрйәм Бураҡаева әҙерләгән программа буйынса ойошторолған был лагерь республикала берҙән-бер генә булып, бер сменала ғына ойошторолоуы бик йәл. Күп балалар теләй унда ял итергә, әммә йыл да һәр район-ҡаланан берәр генә бала, Өфөнән иһә 40-50-ләп бала, сит өлкәләрҙән, Мәскәүҙән 20-ләп бала ял итә ала.

- Ысынында, был программа буйынса лагерҙы һәр район үҙе лә ойоштора алыр ине, - ти Мәрйәм апай Бураҡаева. - Бына быйыл ул Хәйбулла районында, Ейәнсура районының Самаҙы мәктәбендә ойошторолдо. Ундай лагерҙы Өфөләге башҡорт телен өйрәнгән балалар өсөн ойошторғанда ла яҡшы булыр ине. Сөнки Өфөләге башҡорт балалары араһында шулай уҡ лидерҙар күп, тап улар беҙҙең быйылғы "Йәйләү"ҙе күтәрҙе, бар балаларҙы үҙ артынан, үҙ өлгөһөнә эйәртте. Өфөлә бындай лагер ойоштороғанда, унда балаларҙың атаәсәләрен дә тәрбиә эштәренә ылыҡтырырға булыр ине. Сөнки туған телгә ылыҡтырыуҙың бик күп саралары араһында был программа буйынса ойошторолған лагерь иң әһәмиәтлеһе һәм иң йоғонтолоһо бит.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һүҙемдең иң һуңында ял үҙәгенең директоры Денис Йомалиндың һүҙҙәрен килтерәйем: "Минең лагерҙағы тәрбиә эштәренә, сараларға ҡыҫылышым булманы, минең бурыс - хужалыҡ кәрәк-яраҡтары юллау, балаларҙың тукланыуын, уңайлы ял шарттарын хәстәрләү. Әммә эштәр менән булған арала майҙанда, сәхнәлә барған сараларҙы, ярыштарҙы, тамашаларҙы иҫем китеп күҙәтә йөрөнөм. Бындай тәрбиә мәктәбе менән тәүге тапҡыр осрашыуым. Бынаундай глобаллашеү, реформалар алҡымдан алған бер заманда ошондай тәрбиә мәктәптәре, тәрбиә алымдары беҙҙең үҙ асылыбыҙҙы, үҙ-үҙебеҙҙе һаҡлап ҡалыу сараһы була алыр ине, тигәнгә ныҡлап инанылды..." Был һүҙҙәргә ниҙер өҫтәү кәрәкмәйҙер.**

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**



*Илгизәр БУРАҠАЕВ.*

# Башҡорт көсө

**Хикәйәт**

Хан ҡарашы менән яу ялаһының тағы бер тапҡыр байҡап сыҡты. Йөҙөндәге еңеү шатлығы яйлап ҡына юғала барҙы.

Бөгөнгө яуҙа һуғышсыларының байтаҡ өлөшөн юғалтты ул. Үҙ ғәскәренә ҡарағанда күпкә аҙыраҡ башҡорттарҙан бындай ҡаршылыҡ көтмәгәйне. Ә яу һөнәренең бөтә нескәлектәрен өйрәтеү өсөн аҡса ла, көс тә, ваҡыт та йәлләмәгән Хан үҙ һуғышсыларынан күберәкте өмөт иткәйне. Ун биш йәштән ҡулына ҡорал алып яуҙарҙа ҡатнаша башлаған, бер тапҡыр ҙа еңелмәгән, дошман ғәскәренең һан яғынан күпкә өҫтөн булыуына ҡарамаҫтан, байтаҡ һуғыштарҙа уларҙың көлөн күккә осорған һәм шуға ла үҙенең хәрби тәжрибәһенә һәм һуғышсыларының оһоллоғона ныҡ ышанған Хандың бер яуҙа ла бындай юғалтыуҙар кисергәне булманы. Аҙаҡҡаса алышты улар менән башҡорттар. Ҡасманылар... Ана бит, бер нисә бөртөк кенә тороп ҡалғандары ла ҡоралдарын һалып, бирелеү урынына, арҡаға арҡа терәшеп, яралы йыртҡыс ярһыулығы менән ҡаршылыҡ күрһәтеп маташа. Ярай, гүр донъяһына ашҡыналар икән, урындары шунда булыр. Яралыларҙың да береһе лә иҫән ҡалмаясаҡ.

Ҡапыл көслө тауыш менән һөрәнләнгән башҡорт ораны ишетелде. Был оран башҡа бөтә тауыштарҙы ла күмеп, тотош тирә-яҡҡа таралды.

- Ҡорайт, Тәңрем! Алға, туғандарым!

Хан оран яңғыраған яҡҡа ҡараны ла, үҙ күҙҙәренә үҙе ышанмай, ҡатып ҡалды: алты башҡорт яугиры дәһшәтле ғәйрәт менән Хан һуғышсыларының өҫтөнә ташланды ла ҡамауҙы йырып сыға башланы. Уларҙың ҡыҙыл кейемдәре Хан һуғышсыларының ҡара кейемдәренән айырылып тора, шуға ла туҙан араһынан һәр береһенең хәрәкәте асыҡ күренә. Башҡорттарҙың ҡылыстарына һәм һөңгөләренә ҡаршы тимер кейемдәр ҙә, ҡалҡандар ҙа сыҙай алмай, уның һуғышсыларын урталайға тиерлек өҙә сапҡылап, ҡамауҙы өҙөп, үҙҙәренә юл ярып сыға ла башланылар. Бындай ярһыу саялыҡтан Хан һуғышсылары ситкә тайпылды. Башҡорттар күҙ асып йомған арала ҡамау аша алға уҡталды. Дүрт кенә кеше ҡалғайны улар. Хан ғәскәренең бер нисә һуғышсыһы йәйәләренә уҡтарын һалып, башҡорттарға тоҫҡаны, тик атып өлгөрмәне. Мең башлығы, Хан ғәскәре һуғышсыларының иң ғәйрәтлеләренең береһе, унлаған егете менән башҡорттарҙың юлын ҡырҡып, ҡаршыларына килеп сыҡты. Күҙ асып йомған арала улар башҡорттар менән бер бөтөнгә әйләнде, бөтәһен дә ҡуйы туҙан томаны ҡапланы. Туҙан эсенән яу тауыштары ишетелә һәм ваҡыты-ваҡыты менән ҡара, ҡыҙыл кейемдәр күренеп ҡала, ҡорал ялтырай...

Ҡапыл бөтә тауыштар ҙа бер юлы тынды һәм кемдеңдер мыҫҡыллы итеп ҡысҡырып көлөүе тирә-яҡты яңғыратып ебәрҙе. Шул саҡ һуғыш барған урындан күк арғымаҡ килеп сыҡты. Һыбайлыһы юҡ ине. Хандың яратҡан яугирының - мең башлығының аты бит был!

Туҙан да ҡапыл баҫылды. Бер яҡта Хан һуғышсылары, икенсе яҡта башҡорт яугирҙары тора.

Оҙон буйлы башҡорт яугиры тағы йән өшөткөс тауыш менән көлөп ебәрҙе лә, ҡылысын һелтәп, атын Хан һуғышсылары яғына ыңғайлатты. Һуғышсылар, улар биш кенә кеше ҡалғайны, сигенә биреп, ҡоралдарын төшөрөп, башҡорттарға юл бирҙе.

Хандың тамағын әсе төйөн көйҙөрҙө.

- Тереләй алырға, тик тереләй генә! Улар өсөн яу ҡырында үлеү аҙ. Язаһыҙ ҡалырға тейеш түгелдәр! - тип ярһып ҡысҡырҙы ул һәм үҙен һаҡлаусы һуғышсыларҙың етәксеһенә - ҡыйыулығы һәм тоғролоғо менән дан алған Йыһангир исемле батырына:

- Егеттәреңде ал да арттарынан ҡыу! Тереләй тотоп килтерһәгеҙ, рәхмәтемдең сиге булмаҫ, ҡулдан ысҡындырһағыҙ, үҙемә күренмәгеҙ! - тине, йөрәкһеүҙән ҡапыл ҡарлыҡҡан тауыш менән.

Шунда уҡ күп яуҙарҙа сыныҡҡан, бөтә ғәскәрҙә иң сая, гәйаҙ ғына барҙы ла ергә ауҙы. Уның артынан сабып килгән икенсе һыбайлы үҙ атының тиҙлеген аҙ ғына аҡрынайтты ла, ауған ат өҫтөндәге яугирҙы үҙ менгеһенә ултыртып алды.

Хан улы, башҡорт атының ауғанын күреп, тағы бер уҡ атты. Ләкин был юлы үтә ҡабаландымы, әллә икенсе сәбәп арҡаһындамы, был уғы сәпкә теймәне, ҡуш һыбайлыларҙың өҫтөнән үтеп китеп, ергә ҡаҙалды.

Эргәләренән генә уҡ осоп үтеп киткәндән һуң иптәшенең артында барған башҡорт яугиры, әйләнеп, артҡа ҡараш ташланы. "Был беҙҙең яҡынайғаныбыҙҙы күрҙе, хәҙер уҡ яуҙыра башлаясаҡ, һаҡ булырға кәрәк!" тип уйлап ҡуйҙы бөгөнгө яуҙа башҡорттарҙың мәргәнлегенә инанған Йыһангир. Һәм атының теҙгенен тарта биреп ҡуйҙы. Тик башҡорт яугиры атырға уйламаны ла. Тимәк, уларҙың һаҙактарәтле, сос тип танылған йөҙләгән һуғышсы - Хандың шәхси һаҡсылары башҡорттарҙың артынан сапты.

...Яу яланы ла күптән артта ҡалды. Ләкин ара кәмемәй, кәмемәү генә түгел, хатта яйлап ҡына алыҫая бара. "Берәй башҡорт йәйләүенә йәки ауына барып юлыҡҡанға тиклем быларҙы нисек тә ҡыуып етергә кәрәк", тип уйланы ла Йыһангир, ғүмерендә беренсе тапҡыр атына ҡамсыһы менән һуҡты. Менгеһе йән көскә алға уҡталды. Йыһангир күҙ асып йомған арала үҙ егеттәрен артта ҡалдырҙы, башҡорт һыбайлылары менән дә ара күҙгә күренеп кәмей башланы. Тик Йыһангирҙың менгеһе был тиҙлекте оҙаҡ тота алманы, башҡорт һыбайлылары тағы алыҫая башланы. Ярай, башҡаса сара юҡ! Тереләй тотоп булмаҫ, Ханға уларҙың баштарын ғына алып ҡайтырға тура киләсәк! Сығырынан сығырҙай булған Йыһангир йәйәһенә уғын һалды. Башағы йылан ағыуына мансылған уҡ үлемесле һыҙғырып башҡорттар яғына осто. Уның артынан күккә тағы бер нисә уҡ сөйөлдө. Тик уларҙың береһе лә сәпкә осоп барып етмәне. Йыһангир йәнә әсеп ҡысҡырып ебәрҙе, күңелен үҙәк өҙгөс бушлыҡ биләп алды.

Ләкин шул арала уның баш осонан ҡот осҡос һыҙғырып, тағы бер уҡ осоп үтте. Бейеккә, һауаға төбәлгән кеүек осҡан уҡ юғарынан йәшен тиҙлеге менән ергә уҡталды һәм йән фарман сабып барған башҡорт атының артҡы аяғына ҡаҙалды. Йыһангир шатланып, артына боролоп ҡараны: яңылышмаған икән, уҡты былай мәргән дә, ҡеүәтле лә итеп Хан ғәскәрендә тик бер генә кеше - Хандың өлкән улы ғына ата ала. Ул да үҙ егеттәре менән ҡыуа килеүселәргә ҡушылған икән. Былай булғас, Хандың әмере үтәләсәк!

Аяғына уҡ ҡаҙалғандан һуң, башҡорт яугирының менгеһе бер ры буш. Буш! Ысынлап та, уҡтары булһа, күптән үк ата башларҙар ине. Сабып барған аттан артҡа табан атҡанда уҡ мәргәнерәк оса бит! Йыһангир атын тағы ҡыуҙы.

Ә башҡорт яугиры, дошмандарының яҡына башлағанын күреп, ҡалғандарына ниҙер ҡысҡырҙы ла, йән-фарман сабып барған аттан һикереп төшөп ҡалып, ҡынынан ҡылысын һурып сығарҙы.

Ҡалған өс һыбайлы быны күреп, аттарын кире борҙо. Ҡылыслы яугир уларға ниҙер ҡысҡырҙы, ым-ишаралап ниҙер аңлатырға тырышты, юлдарын дауам итергә өгөтләп маташты, ахыры, әммә улары тыңламаны. Һыбайлыларҙың береһе менгеһенән һикереп төштө лә йәйәүле яугир эргәһенә килеп баҫты. Тегенеһе уның күкрәгенә башын терәне. Йыһангирҙың ғәжәпләнеүҙән арҡа буйы семберҙәп китте. "Аяуһыҙ башҡорт егеттәрендә ниндәй бисәләрсә наҙ был? Бәхилләшеү йолалары шулаймы?" - тип кенә уйлап ҡуйҙы ла, һуғышсыларына:

- Егеттәр, хәҙер былар бер ҡайҙа ла китә алмаясаҡ. Тәүҙә аттарын йығайыҡ та, үҙҙәрен тере килеш алырбыҙ. Был - Ханыбыҙҙың әмере! - тине.

* * *

Дүрт батырҙың береһе яугир ҡатын булыуы тураһында хәбәр алғандан һуң, Хандың асыуы ҡыҙыҡһыныуы менән алышынды. Яугир ҡатынды үҙ эргәһенә индерергә ҡушты.

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының матурлығын белһә лә, яугир ҡатынды был тиклем дә һылыу булыр тип һис тә уйламағайны. Оҙон толомло, сөм-ҡара күҙле, йөҙөн тулыһынса тиерлек ҡаплаған саң да уның алһыуланып торған аҡ йөҙөнөң матурлығын йәшерә алмай ине.

- Яҡынараҡ кил! - тип бойорҙо Хан.

Яугир ҡатын Хан яғына бер-ике аҙым яһаны ла туҡтаны. Ашыҡмай ғына яһаған хәрәкәттәрендә лә етеҙлеге һәм йылғырлығы, ә үҙенең тотошонда буйһонмаҫ көс тойола. Ә йөҙөндә ҡурҡыуҙың ғына түгел, хатта тулҡынланыуҙың да эҙе юҡ... Хан быға һоҡланыуын йәшерә алмай, бойороҡ тауышын үҙгәртеп ебәрҙе:

- Кем булаһың, Ҡыҙ батыр? - тип һораны.

Яугир ҡатын исемен, ырыуын, тамғаһын, ҡошон әйтте. Хан уның тауышын ишеткәс, тертләп ҡуйҙы. Уның тауышы, Хан көткәнсә, ҡалын да, көслө лә түгел, ә ҡарашы кеүек үк наҙлы, йомшаҡ, ягымлы ине. Әгәр ҙә Хан бынан алда ғына яугир ҡатындың нисек һуғышҡанын үҙ күҙҙәре менән күрмәһә, уның һуғышсыларының бер нисәһен үлтергәнен күҙәтеп, йәне әрнемәһә, бындай назлы ҡарашлы һәм яғымлы тауышлы ҡатындың аяуһыҙ һуғыша алыуына ышанмаҫ ине. Юҡ, бындай матурлыҡты ул тән язаһы менән ғәриплəмәйәсәк... Йән язаһы бирәсәк. Юғары күтәрелгән башын эйҙерәсәк, ғорур һыны үҙенән-үҙе бөгөләсәк...

Ошо уйҙарҙан һуң Хан яугир ҡатынға:

- Мин яугир. Ирҙәр менән һуғышам, һинең һымаҡ һылыу ҡатындарҙы үлтереп, күңелемә гонаһ алырға һәм исемемә тап төшөрөргә теләмәйем, һине, әлбиттә, ҡоллоҡҡа ала алыр инем. Әммә һинең һымаҡтарҙан баш эйеп, тыңлап йөрөүсән ҡол сыҡмаясаҡ. Һинең һымаҡтар ҡол булыуға ҡарағанда үлемде артығыраҡ күрә һәм йыш ҡына үҙҙәре менән бергә хужаларын да гүр донъяһына алып китә. Ҡол булып тыуған кеше генә ҡоллоҡҡа күнә, ә һин ҡол булып яралмағанһың. Дүрт яғың ҡибла, мин һине ебәрәм, тик яуҙаштарыңдың нисек язаланғанлығын күреп, ырыуҙаштарыңа ҡайтып һөйләрһең, - тине.

Ҡанһыҙлығы һәм ҡаты бәғерлелеге менән дан тотҡан Хандан бындай һүҙҙәр көтмәгән яугир ҡатын аптырап ҡалды, һынаулы ҡараш ташланы. Хан һүҙҙәренең хаҡлығына ышанғас, уның күҙҙәренә туп-тура ҡарап, былай тине:

- Хан, һинең һуғышсыларың беҙҙе ҡыуып килгәндә минең атымды атып йыҡтылар. Мин үлергә тейеш инем. Тик туғандарым - абзыйым, ирем һәм улым үлемде минең менән бергә ҡаршылар өсөн ҡотолған ерҙән кире әйләнеп килделәр. Яу ваҡытында ла улар ҡалҡандары менән үҙҙәренә ҡарағанда мине нығыраҡ ҡапланылар. Улар өсөн лә минең иң яҡын кешеләрем. Шуға һин беҙҙең бөтәбеҙҙе лә ебәр. Һинең бер һүҙең етә бит.

Күҙ йәштәре аша рәхмәт һүҙҙәре көтөп ултырған Хан был үтенестән һуң ҡыҙып китеүҙән саҡ тыйылып ҡалды. Ниндәй дорфалыҡ! Өҫтәүенә, шарттар ҡуя. Әсирҙәр, ғәҙәттә, уның эргәһенә инеү менән ҡойолоп төшә, телһеҙ ҡала. Ә был яугир ҡатын ыжлап та бирмәй, әйтерһең, әсиргә эләкмәгән, ә йомош йомошлар өсөн килеп ингән. Ләкин "йән ғазабы" тигән мәкерле уй ҡапыл зиһенен яҡтыртып ебәргәндәй булды. Ул хатта мыйыҡ аҫтынан ғына көләмһерәй биреп ҡуйҙы. Хәҙер ул ғорурлыҡтың баш эйеүен, саялыҡтың һынеүен, батыр яугир ҡатындың ябай бисәгә әйләнеүен күрәсәк...

Хан тауышына мөмкин тиклем ихласлыҡ һалырға тырышып, яугир ҡатынға былай тип яуап бирҙе:

- Минең хан тигән юғары вазифам бар. Шуға ла мин үҙ халҡыма өлгө булырға һәм әйткән һүҙемде үтәргә тейешмен. Егеттәремде артығыҙҙан ҡыуа ебәргәндә мин бөтә ғәскәрем алдында һеҙҙең дүртегеҙҙе лә ҡаты язаға тарттырасаҡмын тип һүҙ бирҙем. Һине ҡотҡарып, мин үҙ ғәскәрем алдында абруйымды күпмелер кимәлдә төшөрәм. Тик, Ҡыҙ батыр, мин һиңә, матурлығың хаҡына тағы бер бүләк яһарға булдым - юлда яңғыҙыңа күңелһеҙ булмаһын өсөн ошо өс ирҙең берәүһен үҙең менән алырға рөхсәт итәм. Әйт, кемеһен ҡотҡарырға теләйһең: бер туған абзыйыңдымы, һөйөклө иреңдеме, ғәзиз улыңдымы?

Ошо һүҙҙәрен әйткәндән һуң Хан яугир ҡатынды күҙәтә башланы. Күҙ йәштәре атылып сығыуын көттө. Тик яугир ҡатындың ҡарашы ла, торошо ла үҙгәрешһеҙ ҡалды. Бындай тәҡдимгә күптән әҙер һәм мәсьәлә алдан уҡ хәл ителгәндәй итеп:

- Абзыйымды минең менән ебәр, - тине. Ләкин был яуапты биргән саҡта, тештәрен ҡыҫып, сая нур бөркөп ҡалған күҙҙәрен Ханға төбәне, һәм уның ҡарашы Хан йөрәгенә уҡ кеүек ҡаҙалғандай булды. Был ҡарашты күтәрә алманы Хан, ҡарашын ситкә алды һәм:

- Иреңде яратмайһыңмы? Улыңды үҙһенмәйһеңме? - тип һораны мыҫҡыллы тауыш менән.

- Яңылышаһың, Хан. Иремдән ҡәҙерлерәк, улымдан ғәзизерәк кеше юҡ минең өсөн. Тик мин яңынан кейәүгә сыға алам, тағы бала таба алам. Бер туған абзыйымды бер нисек тә ҡайтара алмаясаҡмын, - тине яугир ҡатын.

Хан был яуапҡа ғәжәп ҡалып:

- Ошо һүҙҙәреңде уларҙың үҙҙәре алдында ҡабатлай алаҫаҡһыңмы? - тип һораны ла, йән-тәне аша ләззәтле тойғо йүгереп үткәнен тойҙо. Хәҙер, хәҙер үҙе күрәсәк ниҙер булырын. Ләкин яугир ҡатындың йөҙө тағы тыныс ҡалды. Тик ундай тыныслыҡ булдырыу өсөн яугир ҡатынға ҡанатҡансы уртын тешләргә, усы ҡанһырағансы йоҙроҡтарын төйнәргә тура килде.

- Ҡабатлай алам. Беҙҙә, башҡорттарҙа, һүҙ бер була, - тине.

Артабан ни булырын түҙемһеҙлек менән көткән Хан ҡалған өс яугирҙы алып инергә ҡушты.

Яугирҙарҙы индерҙеләр. Әммә улар ҙа әсирҙәр кеүек түгел, ә үҙ тирмәләренә ингән кеүек, тирә-яҡҡа ҡаранмай, ғорур һәм тыныс ҡына килеп инделәр. Хан һүҙ башлар алдынан уларҙың һәр береһен ҡарашы менән байҡап сыҡты. Кейемдәре лә, йөҙҙәре лә ҡатҡан ҡанға һәм ҡара саңға ҡа-

планған, яу кейемдәре, тимерҙән һәм ҡоростан яһалыуға ҡарамаҫтан, ҡот осҡос йөнселгән, ҡырҡылған, тимер ҡулсалары өҙгөләнгән. Яугирҙарҙың тәне тулы яра, ҡайһы бер яралары һаман да ҡанһырап тора...

Хан үҙе лә батырҙарҙан һанала. Яуҙарҙың һәм яраларҙың төрлөһөн күрҙе һәм үҙендә лә татыны: уға уктар ҙа ҡаҙалды, ҡалҡаны менән ҡуша тимер кейемен тишеп, ҡабырғаларын һөнгө изгән саҡтар ҙа булды, көүҙәһендә лә, йөҙөндә лә дошман ҡылыстарының эҙҙәре һаҡлана. Шуға ла был яугирҙарҙың яраларына ҡараш ташлау менән уларҙың ауыртыныу һәм һыҙланыу самаһын тойҙо һәм аяҡтарында баҫып тора алыуҙарына ҡарап ғәжәпкә ҡалды. Ыңғырашмайҙар ҙа, исмаһам...

- Башҡорттар! Мин яугир ҡатынды һәм уның менән бергә һеҙҙең берәүегеҙҙе ҡотҡарырға ҡарар иттем. Кемегеҙҙе ҡотҡарыуҙы ул үҙе һайлар. Ә ҡалған икәүегеҙҙе дүрт кеше өсөн яза көтә. Был яуҙа ғәскәремдең яртыһынан күбе ҡырылды. Түгелгән ҡандың ҡонон тулыһынса ҡайтарасаҡмын, - тине лә яугирҙарҙы күҙәтә башланы. Яугир ҡатын оҙон керпектәрен түбән төшөргән көйө торҙо. Ә башҡалар... Хан уларҙың ҡатынға инәлеп, өмөтләнеп ҡарауҙарын көттө. Язалар алдынан һәр береһендә ҡотолоу өмөтө уятып, рухтарын һындырмаҡсы булды. Рухы һынмаған дошман үлһә лә еңелмәй...

Йәш яугир тәүҙә, ысынлап та, әсәһенә өмөт тулы ҡараш ташланы. Ләкин уң күҙенә ҡан һауған урта буйлы, мыҡты кәүҙәле яугир улына ҡарап алды ла, Ханға былай тип өндәште:

- Әле өҫтөнлөк һиндә, Хан. Тәнебеҙҙе язалай, ғүмеребеҙҙе ҡыя алаһың. Ләкин беҙҙең өсөн был үлем түгел. Намыҫыбыҙ менән йәнебеҙҙе алырға көсөң етмәйәсәк. Йәнебеҙ - Тәңренеке, намыҫыбыҙ - халҡыбыҙҙыҡы! - тине. Ошо һүҙҙәрҙән һуң йәш яугир атаһына ҡарап ҡуйҙы ла һынын турайта биреп баҫты, әсәһенә башҡа ҡараманы, күҙҙәрен билдәһеҙлеккә төбәне.

Улының бер аҙ тынысланғанын күргәс, ире ҡатынына боролоп:

- Йолабыҙ буйынса эш ит. Беҙҙең өсөн борсолма. Ваҡыты еткәс, Тәңре һарайында осрашырбыҙ. Улым менән һине шунда көтәрбеҙ, - тине.

Яҙаланасағын белеп тә, һаман ҡатыны менән улын тынысландырырға тырышҡан яугирҙың был һүҙҙәренә иҫ-аҡылы китте Хандың. "Ниндәй оҫта! Берсә минә, берсә ҡатынына мәрәкәгә иткән булып, икеһен дә тынысландырҙы бит был!" - тип уйланы ул. Ысынлап та, йәш яугир ҙа, ҡатын да еңел тын алып ҡуйҙы, ҡараштарына яңынан ғорурлыҡ һәм тыныслыҡ ҡайтты.

- Борсолма, кейәү! Беҙ ҙә үҙ бурыстарыбыҙҙы тулыһынса үтәрбеҙ, - тигән һүҙҙәргә Хан һиҫкәнеп китте лә, был һүҙҙәрҙе әйткән оҙон буйлы һәм мөһабәт кәүҙәле урта йәштәрҙәге ир яғына ҡараны. Яугир ҡарашын йәшермәне: унда үс алыу, көрәш сәме балҡый ине. Хан был ҡараштан ҡаушанҡырап ҡалды. Ҡараштың үткерлегенән дә, ярһыулығынан да түгел - ярһыулы ҡараштарҙы ла, ғәйрәтле бәһлеүәндәрҙе лә үҙ ғүмерендә байтаҡ күрҙе Хан, ә был ҡараштағы ҡот осҡос, йән өшөткөс нәфрәт ялҡыны ҡаушатты уны. Батырҙың бар булмышы еңелмәҫ көс менән тулған... Былдайҙарҙың тере ҡалыуы ғүмерлек кенә түгел, үҙең үлгәндән һуң да тыныслығыңды алыр. Яугир ҡатын абзыһын бушҡа һайламаған. Хан үҙенең мәкерле уйының барып сыҡмауын аңланы. Башҡорт ирҙәре, йолалары буйынса хәл итеп, кемдең ҡотолорға тейешлеген үҙҙәре үк аңланы. Яугир ҡатындың һүҙәре артыҡ ине. Хан еңелде, ләкин бирелергә теләмәне. Биргән һүҙен кире алмайынса, бөтә булмышы нәфрәт бөркөп торған бөркөт ҡарашлы батырҙы ҡулдан ысҡындырмау теләге менән:

- Йола тигән булып, балаһы өсөн йөрәгенә ҡан һауып торған һылыуыңдың мәрхәмәтлелегенән бик оҫта файҙаланаһың. Ә һин бит ашарын ашағанһың, йәшәрен йәшәгәнһең, - тине Хан, мыҫҡыллы йылмайып.

- Ғүмеремдең йәшәлгән өлөшөн үлем яҡынайтыу өсөн түгел, ә туғандарым ҡонон ҡайтарыу өсөн тупланған тәжрибә итеп файҙаланасаҡмын. Һәм быны мин йәштәргә ҡарағанда оҫтараҡ башҡарасаҡмын, - тип яуап ҡайтарҙы яугир.

Был һүҙҙәрҙән һуң Хан ярым асыҡ ауыҙын ябырға ла онотоп, аптырап ҡалды. "Бошман..." - тигән исем мейеһен ярып килеп инде.

Ҡыпсаҡ ырыуы башҡорто Бошман батыр тураһында бәләкәй сағында ғына ишетһә лә, был исем зиһененә уйылып ҡалғайны.

...Ауыһыҙ яуҙарҙан һуң ауыр яралы Бошман батырҙы ҡулға алғас, Хандың олаталарының береһе уның ғорурлығына иҫе китеп һәм рухын һындырырға теләп: "Минең алдымда теҙләнеп тороп, егеттәрең тарафынан үлтерелгән яугирҙарым өсөн ғәфү үтенһәң, тере ҡаласаҡһың, теҙләнмәһәң, яза ҡаты буласаҡ", - тигән шарт ҡуйған. Бошман батыр уға: "Һинең ереңә мин баҫып инмәнем. Үҙ еремде һаҡлағаным өсөн береһенән дә ғәфү үтенергә йыйынмайым. Ә теҙләнеп торорға мин дөйә түгел. Мин - Кеше!" - тип яуап ҡайтарған. Язаланған сағында ла ыһ та итмәгән. Үлемдән һәм ҡаты язанан ҡотолоу өсөн бары теҙләнергә генә кәрәк булғанда, ни эшләп күрәләтә үлемгә ҡаршы барырға икән, тип аптырағайны Хан был ваҡиғаны ишеткәндән һуң. Бөгөн иһә Бошман батырҙың үҙе һымаҡ уҡ ғорур һәм сая тоҡомдары уның алдында тора. Былары ла теҙләндереп булмаясаҡ. Уларҙың береһе, Хандың ҡаты язаһынан ҡурҡмау ғына түгел, хатта үлем күҙҙәренә ҡараған килеш тә үс алыу тураһында уйлай, һәм уйҙарын хатта йәшереп тә маташмай.

Йәшен тиҙлеге менән мейе күҙәнәктәрен земберләтеп үткән был уйҙарҙан һуң Хан асыуынан тонсоғор хәлгә етте, күҙҙәренә ҡан һауа башланы.

- Ошо һүҙҙәрең өсөн мин үҙ вәғәҙәмде кире алып, дүртегеҙҙе лә үсем ҡанғансы язалатасаҡмын! - тине ул ярһып. Шунан эргәһендә торған өлкән улына. - Дүрт дар ағасы әҙерләт! - тип бойорҙо.

Улы сығып китте.

- Язаның иң ҡатыһын татыясаҡһығыҙ, - тине Хан. Башҡорт яугирҙарының йөҙөндә бер үҙгәреш тә һиҙелмәне.

- Язанан ҡурҡмайбыҙ, Хан, - тип һүҙен дауам итте оҙон буйлы яугир. - Әле беҙҙең өсөн язаның ҡатылығы түгел, ә ошо һынауҙы нисек үтеүебеҙ ҡиммәт. Әле беҙҙең һәр беребеҙ башҡорт йөҙөн билдәләй, үҙендә башҡорт көсөн һынай.

- Ә көсөгөҙ нимәлә һуң һеҙҙең?

- Көсөбөҙ - туғанлыҡта.

Хандың арҡаһына ара-ара ҡапыл бөтә тәнен утҡа һалғандай янып һыҙлай башланы. Тәхет өсөн алышҡан саҡта ул тәүҙә ҡустыһын үлтерҙе. Аҙаҡ үҙенең арҡаһына ағаһының бысағы килеп ҡаҙалды. Был яра йөрәгенә аҙ ғына етмәне. Әле инде ошо яра тотош йөрәген ялманы. "Көс - туғанлыҡта... Былар туғанлыҡтары менән көслөләр. Һәм бәхетлеләр. Тормошта ла, яуҙа ла, хатта үлемдә лә туғанлыҡтарына тоғролар. Ә минең туғандарым тәхет өсөн ҡырылып бөттөләр. Олатайҙарым ханлыҡ булдырыу өсөн дошмандарын аямаған, ә беҙ шундай уҡ ҡанһыҙлыҡ менән бер-беребеҙҙе ҡырҙыҡ. Ә минең улдарым ни эшләр? Мин үлгәс, нимә булыр? Ҡайһыныһы еңер?" Был уйҙан Хандың йөрәгенә хәнйәр ҡаҙанылармы ни? Ағаһының бысағынан ҡалған яраның йылдар үткәс йән ғазабына әүерелеүен көтмәгәйне ул. Был ауыртыуға түҙә алмай, Хан күҙҙәрен йомдо. Күҙ алдына улдары килеп баҫты. Бына улар, баһадир һынлы, матур, ғорур алты егет бер-береһенә ҡаршы баҫып тора. Бөтәһенең дә йөҙҙәрендә нәфрәт, ә ҡулдарында ҡорал. Ҡотҡарырға, ҡотҡарырға кәрәк уларҙы! Мин бит һеҙҙе үҙ-ара ыҙғыш, талаш, ҡырылыш өсөн түгел, ә бөйөк эштәр өсөн үҫтерҙем!

Хан әсирҙәренә ҡараш ташланы. Бына улар, йөҙҙәре яҡты, ингә-иң терәп, тыныс ҡына баҫып торалар.

- Һүтегеҙ дар ағастарын, өйөрҙән иң яҡшы дүрт атты һайлап бирегеҙ ҙә, ҡайтарып ебәрегеҙ. Арттарынан бер уҡ та осмаһын! - тине Хан, байтаҡ өндәшмәй ултырғандан һуң.

...Башҡорт яугирҙары төн ҡараңғылығында юғалғанға тиклем Хан уларҙы ҡарашы менән оҙатты...

- Атай, - тип өндәшеүгә һиҫкәнеп, әйләнеп ҡараны Хан. Артында арғымаҡтарына атланған, баштан аяҡ ҡоралланған улдары тора ине. - Еңелеүме был? - тип һораны өлкән улы һәм ымлап, йәйәһенә күрһәтте.

- Юҡ! Туғанлыҡтың бөйөк көсөнә хөрмәт был. Фәһем алығыҙ: ул үлемдән көслө...

**РЕДАКЦИЯНАН: Был хикәйәтте беҙ гәзитебеҙҙә бер тапҡыр баҫтырғайныҡ инде. Ул мәктәп дәреслектәренә лә ингән. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә ошо хикәйәт буйынса төрлө бәхәстәр, фекер алышыуҙар үткәрелә икәнен дә беләбеҙ. Һәр башҡорт балаһында илһөйәрлек, батырлыҡ, туғанлыҡ, ныҡлыҡ кеүек матур сифаттар тәрбиәләүҙә ҡулланыла торған рухи әсбап был. Уның күҙ алдындағы кәштәлә тороуы, ҡабат-ҡабат уҡып торолоуы яҡшы.**

ИЖАДХАНА

# "БАЙЫҠ" БАЛАЛАРЫ ЛА...

## бейей-бейей оҫтара



**Күгәрсен районының "Моразым" тарлауығында дүртенсе тапҡыр Башҡортостан Республикаһы Президенты призына "Балалар Байығы - 2012" республика конкурсы үтте. Башҡорт халҡының мәҙәни һәм рухи мираҫын һаҡлау, үҙешмәкәр халыҡ ижадын популярлаштырыу, һәләтле йәштәрҙең милли хореографияға ҡыҙыҡһыныуын көсәйтеү маҡсатында ойошторолған был бәйге йылдан-йыл күберәк ҡатнашыусылар йәлеп итә. "Балалар Байығы - 2012" конкурсы тәьҫораттары һәм шулай уҡ "Байыҡ" телевизион бәйгеһе һәм бөгөнгө башҡорт бейеүенең торошо тураһындағы фекерҙәре менән был проекттарҙың авторы, БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Рита Ришат ҡыҙы ӨМӨТБАЕВА уртаҡлаша.**

### Телевидение халыҡсан булырға тейеш

Һөнәрем буйынса режиссер һәм эшем телевидение менән бәйле булғас, халыҡ араһында күп йөрөргә тура килә. Бигерәк тә ауылдарға командировкаға барһам, аҡһаҡал олатайҙарҙы, мөләйем йөҙлө инәйҙәрҙе күреп һоҡланам, уларҙың ҡылыҡтарын, үҙ-үҙен тотошон, йырлауын, бейеүен, сәсән һүҙен телевидение таҫмаһына яҙҙырып ҡалыу теләге уяна. Ошо теләк "Гәлсәр һандуғас", аҙаҡтан иһә "Байыҡ" телевизион конкурсы проектына тотоноуыма этәргес булғандыр ҙа инде.

Ғөмүмән, телевидение жанрының төп үҙенсәлеге - даими хәрәкәт һәм халыҡсанлыҡ. Студияла ултырып ҡына халыҡтың тормошон күрһәтеп һәм күреп булмай. Бөгөн башҡорт телевидениеһы яңырыу осоро кисерә, әммә бында бер нәмәне күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай: телевидение халыҡтан айырыла алмай. Халыҡ асмы, туҡмы, бейейме, йырлаймы, илаймы - былар бөтәһе лә телевидениела асыҡ сағылырға тейеш. Сөнки ул - тормош көҙгөһө, ул - дәүләт кимәлендә атҡарыласаҡ эштәрҙең этәргес көскә эйә механизмы. Дәүләт сәйәсәтен көйләүгә лә, дәүләт программаларын ҡабул итеүгә лә телевидение сәбәпсе булырға тейеш. Ул бер ҡасан да шәхси телевидениеға әйләнеп китергә тейеш түгел, сөнки ул халыҡтыҡы, уның ҡабул ителгән үҙ концепцияһы, үҙ уставы бар, ошоларҙан беҙ бер нисек тә ситләшә алмайбыҙ. Шуға ла киләсәктә телевидениела халыҡсан тапшырыуҙарҙың күберәк булыуын теләйем.

### Бейегән кеше бай була...

2011 йылда БР Президенты тарафынан ҡабул ителгән ҡарар буйынса "Байыҡ" конкурсы йыл һайын уҙғарыла. Быйыл был бәйге бишенсе тапҡыр үтәсәк. Халыҡ бейеүҙәрен башҡарыусыларҙың "Байыҡ" конкурсының телевидение форматында ойошторолоуы - уның уңышлы яҡтарының береһе. БСТ-ны халыҡ ҡарай, ярата, шуға ла беҙҙең тапшырыуҙы ла шунда уҡ күтәреп алдылар. Халыҡ араһында бейеүселәр күп, әммә уларҙы берләштереүсе юҡ ине. Хәҙерге көндә "Байыҡ" тапшырыуы ошо яуаплы вазифаны башҡара, тип әйтһәм, моғайын, яңылышмаҫмын. "Байыҡ" телевизион конкурсы сәхнәһендә тамашасы профессиональ башҡарыусыларҙы түгел, ә үҙен, күршеһен, танышын, райондашын күрә, был уларға бик оҡшай. Әле яңыраҡ ҡына "Байыҡ - 2012" конкурсының беренсе һайлау турына йомғаҡ яһаныҡ, унда яҡынса ете йөҙгә яҡын башҡарыусы ҡатнашты. Улар араһынан өс йөҙгә яҡын бейеүсе икенсе турға үтте. Икенсе тур талапсанырак үтә, сөнки ошо тиклем бейеүселәр араһынан иң-индәр билдәләнә бит. Баһалаусылар иненә төшә лә инде был яуаплылыҡ. Радмир Бәҙретдинов, Ишмөхәмәт Ғәләүетдинов, Рәшиҙә Туйсина, Наилә Сәфәрғолова, Йәмилә Бикбаева - улар барыһы ла сәнғәт өсөн борсолған, янып-көйгән, башҡорт бейеүенең асылын, тарихын, үҫеш традицияларын яҡшы белгән шәхестәр.

Дөйөм башҡорт бейеүе тураһында, әлбиттә, профессиональ бейеүселәр, уның тарихын өйрәнеүселәр күберәк әйтә алыр ине. Шулай ҙа башҡорт бейеүенә үҙ мөнәсәбәтем булғанға күрә, был йәһәттән үҙемдең дә теләктәрем бар. Бөгөн башҡорт бейеүҙәре фондын булдырыу, уларҙы телевидениеға яҙҙырып ҡалыу зарурлығы бар, шулай уҡ бейеүҙәребеҙҙе ЮНЕСКО-ға индереү ҙә күптән хәл итеүҙе көткән мәсьәлә. Икенсенән, Башҡортостанда дәүләт кимәлендәге балалар бейеү ансамбле ойоштороу кәрәклеге тураһында әллә ҡасандан бирле һөйләйбеҙ, әммә ул һаман һүҙҙә генә ҡалыуҙы дауам итә. Өсөнсөнән, республика бейеү ҡуйыусыларға ҡытлыҡ кисерә, һәләтле йәштәрҙе Мәскәүгә, башҡа ҡалаларға ебәреп уҡытып алһаҡ, бик яҡшы булыр ине. Спорттағы уңыштар менән донъяны яулап булған кеүек, башҡорт бейеүе менән дә үҙебеҙҙе донъяға таныта алыр инек.

**(Дауамы 16-сы биттә).**

*✓ Тап ниндәй төндә Ҡәҙер төнөнөң килеүен әйтмәүемдә ҙур файҙа бар. Сөнки ошо төндә Аллаһы Тәғәләгә хеҙмәт итергә теләүселәр ай дауамында тоғро хеҙмәттә буласаҡтар.*



ИНТЕРНЕТТАН



# МАҠСАТЛЫ КЕШЕ...

## сәләмәт була

■ Статистика буйынса, үҫешкән илдәрҙә ғүмер оҙайлығы арта. New Scientist ошо темаға үткәрелгән тағы бер тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһен баҫтырып сығарған: сентябрҙән алып ноябргә тиклем тыуған балалар үҙҙәренең тиҫтерҙәренә ҡарағанда тағы ла оҙағыраҡ йәшәйәсәк. Чикаго университеты ғалимдары Наталья һәм Леонид Гавриловтар1980 һәм 1995 йылдар арауығында тыуған 1500 оҙаҡ йәшәүсе тураһында мәғлүмәттәр йыйған. Ғалимдар нәҫел, ауырыуҙар, тирә-яҡ мөхит, туғандарының ғүмер оҙайлығы, социаль-иҡтисади хәл факторҙарын иҫәпкә алғандан һуң, көҙөн тыуғандар тиҫтерҙәренә һәм туғандарына ҡарағанда оҙағыраҡ йәшәй, тигән һығымтаға килгән. Был феноменды аңлатып, ғалимдар был айырмалыҡтарҙың миҙгел инфекциялары менән бәйле булыу ихтималлығы тураһында белдергән. Билдәле булыуынса, "йәйге" инфекциялар яңы тыуған баланың һаулығына ярайһы уҡ зыян килтерә, бының эҙемтәһе артабан да үҙен белдереп торасаҡ. Шулай уҡ бында ҡыш, яҙ һәм йәй тыуған сабыйҙарҙың әсәләренең миҙгелгә ярашлы витамин дефициты һәм гормон кимәле үҙгәреп тороуы ла "ғәйепле" булыуы бар.

■ Маҡсатҡа ынтылып йәшәү - кеше характерының ыңғай сифаты ғына түгел. Тормошта маҡсат булыуы кешенең физик сәләмәтлегенә лә яҡшы йоғонто яһай. Чикаго психологтары һәм физиологтары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, маҡсатлы йәшәгән кешеләр араһында иртә һәм осраҡлы үлем һирәк осрай. Бынан тыш, физиологтар әйтеүенсә, маҡсатлы кешеләр хроник ауырыуҙар менән һирәгерәк яфалана, уларҙың һаулыҡ торошо күпкә яҡшыраҡ була.

■ Кливленд клиникаһы (АҠШ) тикшеренеүселәре кеше организмында артерияларҙа тәйөрсәләр барлыҡҡа килеү менән көрәшеүсе һәм атеросклероздың үҫешен туҡтатыусы молекулаларҙы асыҡлаған. Атеросклероз липид әйләнеше боҙолоуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә, был сир ваҡытында артерияларҙың эске стеналарына холестерин тәйөрсәләре ултыра. Был йөрәк, мейе һәм башҡа ағзаларҙың ҡан тамырҙары сәләмәтлегенә насар йоғонто яһай, инфаркт һәм инсульт та ошо сәбәпле барлыҡҡа килә. Америка ғалимдары кеше организмында липид әйләнешен яйға һалыусы Akt3 тип йөрөтөлгән молекулаларҙы асыҡлай һәм был асыш һөҙөмтәһендә атеросклерозды иҫкәртеүсе яңы препараттар уйлап табыласаҡ.

■ Мәскәүҙең мәктәп уҡыусылары тукланыуы буйынса йәмәғәт советы ата-әсәләргә балаларына роллы һәм суши ашатыуҙан тыйылырға кәңәш итә. Был турала ойошманың рәйестәше Валентина Иванова белдергән. Уның фекеренсә, был ризыҡтарҙы 21 йәштән һуң ғына ашай башларға ярай. Япон кухняһы өсөн сырье сит илдән килтерелә һәм был уның сифатында сағыла, һөҙөмтәлә ағыуланыу осраҡтары йыш була. Бөтөн Рәсәй ғилми-тикшеренеү институты директоры Владимир Харитонов үҙ сиратында Рәсәй мәктәптәрендә белем алыусыларҙы бушлай йәки ҙур булмаған хаҡҡа һөт менән тәьмин итергә кәрәклеген белдерҙе. Яҡынса 40 илдә, шул иҫәптән, Таиланд һәм Чилиҙа балаларға мәктәптә бушлай бер стакан һөт бирәләр. Уның фекеренсә, һөт аҙыҡтарына ҡытлыҡ кисермәүсе Рәсәй уҡыусыларҙы был файҙалы ризыҡ менән тәьмин итергә бурыслы.

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# ҠӘҘЕР ТӨНӨН..

## ғибәҙәттәр ҡылып үткәр



Шәмғун исемле кеше әле үҙгәрмәгән Тәүратҡа буйһоноп йәшәгән. Уны уратып алған йәмғиәт поттарға табынған. Шәмғун Аллаһы Тәғәләне инҡар итеп, үҙҙәре яһаған илаһтарға табынған кешеләр менән көрәш алып барған. Уларҙы Аллаһы Тәғәләгә инанырға саҡырған. Дошмандары уны төрлөсә юҡ итергә тырышҡан. Бер саҡ Шәмғун йәшәгән ҡаланың башлығы уны тоторға һәм һарайы алдына аҫып ҡуйырға бойороҡ бирә. Ҡулға алынған батыр Аллаһы Тәғәләгә: "Йә, Раббым! Йәшәгем һәм Һинең юлыңда көрәшкем килә. Теләктәрем ысын йөрәктән сыҡһа, ҡотҡар мине!"- тип ялбара. Шул мәл фәрештә төшөп, уны дошмандары ҡулынан ҡотҡара. Ҡотҡарылған Шәмғун яуыз ҡала башлығын һәм уның хеҙмәтселәрен хөкөм итә, артабан Аллаһы Тәғәләне инҡар итеүселәр менән япа-яңғыҙ көрәшеүен дауам итә, кешеләргә хаҡ юлға саҡыра. Ул көндөҙ ураҙала булһа, төндәрен намаҙ уҡып үткәрә.

Бер ваҡыт Мөхәммәт бәйғәмбәр, Шәмғунды күҙ уңында тотоп, сәхәбәләренә: "Бер йәһүди Аллаһ юлында мең ай көрәшкән, хаҡ юлға саҡырған", - тигән һүҙҙәр әйтә. "Мең аймы?" тип ғәжәпләнә сәхәбәләр. Ә берәһе: "Беҙҙең бар тормошобоҙ ул тиклем изгелек эшләргә етмәйәсәк. Нисек беҙ ҙә шул дәрәжәгә етә алабыҙ?" - тип һорай ҡуя. Шул ваҡыт фәрештәләр башлығы Ябраил ғәләйһиссәләм Бәйғәмбәребеҙгә: "Йә, Мөхәммәт! Аллаһы Тәғәлә һиңә бынан да яҡшыраҡ игелек ебәрҙе", - ти һәм "Әл-Ҡәдр" сүрәһен уҡый. "Бисмилләһир-рахмәнир-рахим! Ысынлап та, Беҙ уны (Ҡөрьәнде) күндерҙек Ҡәҙер төнөндә. Ҡәҙер төнөнөң ни икәнен беләһеңме? Ҡәҙер төнө мең айҙан да изгерәк! Ул төндә Раббы рөхсәте буйынса фәрештәләр менән Рух (Ябраил фәрештә) төрлө әмер алып төшә. Ул төндә таң атҡансы именлек була".

Эйе, был төндә Аллаһы Тәғәләнең ниғмәттәрен таратыусы фәрештәләр ергә төшә. Шайтан сылбырҙар менән бәйләнә һәм бер кемгә лә насарлыҡ эшләй алмай. Фәрештәләр шул тиклем күп була, хатта өҫкә ырғытылған энә лә мотлаҡ уларҙың берәһенә төшөрлөк була. Улар бөтәһе лә Аллаһы Тәғәлә юлында йәшәүселәрҙең, эшләүселәрҙең, ғибәҙәт ҡылыусыларҙың гонаһтары ярлыҡаныуы өсөн доға ҡылалар. Таң атҡас, Ябраил ғәләйһиссәләм фәрештәләрҙе үҙе янына саҡыра. Фәрештәләр унан: "Йә, Ябраил! Мөьминдәрҙең гонаһтарын ярлыҡауын һорап ҡылған доғаларыбыҙҙы Аллаһы Тәғәлә ҡабул иттеме?" - тип һорай. Ябраил ғәләйһиссәләм: "Аллаһы Тәғәлә киләһе дүрт төркөмдән башҡа, бөтә мөьминдәрҙең дә гонаһтарын ғәфү итте. Ғәфү ителмәүселәр эскән кешеләр, ата-әсәһен тыңламаусылар, туғанлыҡ ептәрен өҙөүселәр, дин ҡәрҙәше менән өс көндән артыҡ аралашмаусылар".

Ҡәҙер төнөндә ошо төн өсөн генә хас булған үҙенсәлектәр шул: ай яҡтылығына ла, ҡояш яҡтылығына ла, башҡа бер ниндәй яҡтылыҡҡа ла хас булмаған яҡтылыҡ, ағастар, бөтә үҫемлектәр ҡылған сәждәләр, ҡанатлы фәрештәләрҙе күреү һәм уларҙың тауыштарын ишетеү мөмкинлеге. Был көндә ҡояштың ҡалҡыуы ла башҡа көндәрҙәгенә оҡшамаған була. Аллаһы Тәғәлә уларҙы теләгән ҡолдарына күрһәтә. Әгәр ғибәҙәт менән үткәрелгән төн Ҡәҙер төнө менән тап килһә, үрҙә әйтелгән мөғжизәләрҙе күрмәгәндә лә, шундай уҡ әжер аласаҡ мөьмин.

Ҡәҙер төнөнөң ниндәй төндә булырын дөрөҫ кенә әйтеп булмай. Ислам донъяһында Рамаҙан айының 27 төнө тигән дөйөм ҡараш йәшәһә лә, бер кем дә Ҡәҙер төнө тап ошо төндә буласаҡ тип әйтмәй. Аллаһы Тәғәлә ул төндә үҙенең ҡолдарынан йәшереп, мөьминдәр өсөн ҙур изгелек ҡурһәткән. Бер сәхәбә шундай риүәйәт һөйләй: "Бәйғәмбәр сәхәбәләренә ошо төн, уның ҡасан етеүе хаҡында һөйләмәксе булып, өйөнән сыға. Юлда Ҡәҙер төнө тураһында бәхәс ҡорған ике мосолманды осрата. Уларҙы тыңлап торғас, Бәйғәмбәребеҙ әйтә: "Мин һеҙгә ошо төн тураһында һөйләргә китеп бара инем. Әммә һеҙҙең араларағы бәхәсте ишеткәс, ҡарарымды үҙгәрттем. Тап ниндәй төндә Ҡәҙер төнөнөң килеүен әйтмәүемдә ҙур файҙа бар. Сөнки ошо төндә Аллаһы Тәғәләгә хеҙмәт итергә теләүселәр ай дауамында тоғро хеҙмәттә буласаҡтар. Бигерәк тә Рамаҙандың һуңғы ун көнөндә әүҙемлек күрһәтәсәктәр. Әгәр мин Ҡәҙер төнөн күрһәтһәм, ай буйына хеҙмәт итеүгә бирелгән әжерҙән баш тартып, улар Хоҙайға ошо төндә генә хеҙмәт итерҙәр ине".

Икенсе хәҙистә Бәйғәмбәребеҙҙең Рамаҙан айының һуңғы төндәрендә йоҡламауы, бөтә яҡындарын уятыуы, ғибәҙәттәрен арттырыуы бәйән ителә. Шулай ҙа Ҡәҙер төнөнөң Рамаҙан айының һуңғы таҡ төндәрендә йәшеренгәнен Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең: "Ләйләтул Ҡадр төнөн Рамаҙан айының һуңғы ун көнөнөң таҡ төндәрендә эҙләгеҙ", - тигән хәҙисе раҫлай. Шулай уҡ Ислам диненең ҙур ғалимдары һәм әүлиәләре тормоштары тәжрибәһенән сығып, Ҡәҙер төнөнөң Рамаҙан айының 21, 23, 25, 27, 29 төндәренә тап килеүе тураһында әйтергә мөмкин.

Ҡәҙер төнөн ғибәҙәттә үткәреү хуплана. Сөннәт, ҡаза һәм нәфел намаҙҙарын ҡылып, Ҡөрьән уҡып, зекер, салауаттар әйтеп, мөьмин был төндә Аллаһы Тәғәләгә тағы ла ныҡыраҡ яҡыная, мең ай ғибәҙәт ҡылғандан да ҙурыраҡ әжер-сауап ала. Ә мең ай һикһән өс йыл ғүмерҙә ғибәҙәттәрҙә генә, көндөҙ ураҙа тотоп, төндәрен намаҙ уҡып үткәреүгә тиң.

**Азамат ӘБУТАЛИПОВ әҙерләне.**

# ИЗГЕ РАМАҘАН АЙЫНДА НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1433 һижри йыл.*

| Июль, август | Сәхәр ашап бөткән ваҡыт | Иртәнге намаҙ | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу. Аҡшам намаҙы | Йәстү, тәрәүих намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 4, шәмбе | 04.33 | 05.03 | 14.30 | 20.39 | 22.09 | 23.40 |
| 5, йәкшәмбе | 04.35 | 05.05 | 14.30 | 20.37 | 22.07 | 23.40 |
| 6, дүшәмбе | 04.37 | 05.07 | 14.30 | 20.35 | 22.05 | 23.35 |
| 7, шишәмбе | 04.39 | 05.09 | 14.30 | 20.33 | 22.03 | 23.35 |
| 8, шаршамбы | 04.41 | 05.11 | 14.30 | 20.31 | 22.01 | 23.35 |
| 9, кесе йома | 04.42 | 05.12 | 14.30 | 20.29 | 21.59 | 23.30 |
| 10, йома | 04.44 | 05.14 | 14.30 | 20.27 | 21.57 | 23.30 |
| 11, шәмбе | 04.46 | 05.16 | 14.30 | 20.25 | 21.55 | 23.25 |
| 12, йәкшәмбе | 04.48 | 05.18 | 14.30 | 20.22 | 21.52 | 23.25 |
| 13, дүшәмбе | 04.50 | 05.20 | 14.30 | 20.20 | 21.50 | 23.20 |
| 14, шишәмбе | 04.52 | 05.22 | 14.30 | 20.18 | 21.48 | 23.20 |
| 15, шаршамбы | 04.53 | 05.23 | 14.30 | 20.16 | 21.46 | 23.20 |
| 16, кесе йома | 04.55 | 05.25 | 14.30 | 20.14 | 21.44 | 23.15 |
| 17, йома | 04.57 | 05.27 | 14.30 | 20.11 | 21.41 | 23.15 |
| 18, шәмбе | 04.59 | 05.29 | 14.30 | 20.09 | 21.39 | 23.10 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *"Саттвик" йәки таҙа диета тере аҙыҡ-түлеккә нигеҙләнгән. Ул ҡояштың, һауаның, ерҙең һәм һыуҙың берлегенән тыуған. "Саттвик" диетаһы яңы емеш-еләккә, уларҙан яңы ғына һығылған һуттарға, ярмаларға өҫтөнлөк бирә.*



*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# БӘЙҒӘМБӘРЕБЕҘҘЕҢ...

## сәләмәтлек ҡағиҙәләре



**Динебеҙҙең төп сығанаҡтары - Ҡөрьәндә һәм Бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сөннәтендә кешенең физик сәләмәтлеген һаҡлау өсөн күп кенә күрһәтмәләр бирелгән. Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙенең өммәтен ғибәҙәт ҡылырға ғына түгел, шулай уҡ кешенең тормошон еңеләйтергә, тән, рух һәм әйләнә-тирә менән гармония тыуҙырған йәшәү рәүешенә өйрәтә. Аллаһы Тәғәлә үҙенең ҡолдарына рух, аҡыл һәм тән сәләмәтлеген тәьмин иткән бөтә нәмәне рөхсәт итә һәм тыйолғанды, һәләтте тараҡтан, уның рухи һәм физик сәләмәтлегенә зыян итерҙәй эштәрҙе тыя.**

### Әүҙем булһаң - ауырымаҫһың

Организмдың әүҙем эшмәкәрлеге өсөн дөрөҫ туҡланыу мөһим. Ләкин кеше аҙ хәрәкәтләнеүсән йәшәү рәүеше алып барһа, аҙыҡ организм тарафынан тулыһынса һеңдерелеп бөтмәйәсәк. Һеҙәмтәлә был һимереүгә, үт ҡыуығының, бөйәл юлының, ҡан тамырҙарының тығылыуына, быуындарға тоҙ ултырыуына килтереүе ихтимал. Хеҙмәт эшмәкәрлеге һәм физик күнекмәләр был хәлдәрҙән иң яҡшы һаҡланыу ысулы булып тора. Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Аллаһым, мин ялҡаулыҡтан һәм ҡартлыҡ хәлһеҙлегенән һинә һыйынам", - тип доға әйтер булған.

Ер йөҙөндә үҙендең тормош юлын үтер һәм Аллаһы Тәғәлә тарафынан иңебеҙгә һалынған вазифаларҙы лайыҡлы башҡарыр өсөн кешегә ныҡлы рух ҡына түгел, ә ныҡлы тән дә кәрәк. Тәне сәләмәт булған кеше генә шәхси, ғаилә, йәмғиәт вазифаларын еренә еткереп башҡарырға әҙер була.

Исламда үҙендең ғаиләне аҫырау өсөн хәләл юл менән мал табыу Аллаһы Тәғәләгә яҡынайыуҙың, ғибәҙәттең бер төрө һанала. Ислам - ул хеҙмәткә саҡырыу. Бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бер хәҙисендә: "Саҙаҡа һорауға ҡарағанда, бер ҡосаҡ утын бысып алып килеү яҡшыраҡ", - тиелә. Аллаһ илсеһе ҡулдары ауыр эштән ярылып бөткән бер сәхәбәне күреп: "Был ҡулдар тамуҡҡа эләкмәйәсәк", - тигән. Тик шуны иҫтә тоторға кәрәк: эш ғибәҙәткә әйләнһен һәм Ҡиәмәт көнөндә үлсәү тәрилкәһендә ауырлығы булһын өсөн кешегә Аллаһы Тәғәлә тарафынан әмер ителгән бурыстарҙы (намаҙ, ураҙа, зәкәт, хаж) үтәргә һәм хәрәм менән бәйле хеҙмәттән һаҡ булырға кәрәк.

Физик ауырлыҡ ваҡытында тән йыйына, матдәләр алмашыныу процестары көсәйә һәм шлактар юйыла, тән таҙарына, көс йыя һәм яңынан аҙыҡ ҡабул итергә әҙер була. Быуындар һәм һеңерҙәр нығына, май массаһы мускулдыҡы менән алмашына. Умыртҡа һөйәге нығына, йөрәк-ҡан тамырҙары эшмәкәрлеге яҡшыра.

**Гөлнәзирә ЗӘЙНУЛЛИНА әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ*



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



### Прививкалар

АКДС прививкаһының "зыянһыҙ" эҙемтәләре бына шундай. Шулай уҡ АКДС прививкаһынан һуң мейе елһенә (шуға ла балалар тәүлектәр буйына илай), был төрлә кире эҙемтәләргә, хатта аҡыл үҫешенең тотҡарланыуына килтереүе мөмкин.

Хәҙер ҡыҙҙарҙы һәм ҡатындарҙы аналыҡ муйынының яман шешенән "теләк" буйынса-мәжбүри вакцинациялау (Гардасил, Церварикс) бара. Прививка яман шештең барлыҡҡа килеүен иҫкәртә алмай, сөнки уның сәбәбе - агрессив мәхит, ә прививкалар ошо агрессив мәхитте көсәйтә генә. Атап үтелгән прививкалар тәьҫирендә ҡатын-ҡыҙҙар организмында хорионик гонадотропин (ХГТ) гормонын юҡҡа сығарыусы антиматдәләр бүленеп сыға, был инде түлһеҙлеккә килтерә. Ошо привикалар йөгонтоһонда ҡатын-ҡыҙҙарҙың эсе ныҡ ауырта башлай, түллек биҙендә проблемалар барлыҡҡа килә, күрем циклы боҙола йәки бөтөнләй туҡтай. Шулай итеп, был прививка ҡатын-ҡыҙҙарҙы стерилләүгә килтерә.

Шулай уҡ бер ниндәй ҙә ҡош һәм суска киҙеүе пандемияһы булмауы билдәле. Ә уларға ҡаршы вакцина алдан әҙерләнеп һәм эшләнеп, иммунитетты ҡаҡшатыуға йүнәлтелә (өс вакциналы система). Вакциналар составында терегөмөш һәм алюминий, формалин һәм фенол (доктор Александр Коток, "Прививки в вопросах и ответах для думающих родителей") бар һәм улар организмдан бер нисек тә сығарылмай һәм үҙенең емергес эшен ғүмер буйы дауам итә!

Медицина университеттарында, прививка һөҙөмтәһендә бөтөн донъяла сәсәк ауырыуын ендек, тип уҡыталар. Бөтә донъя Һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәре буйынса, сәсәктән прививка бөтә ерҙә лә эшләнмәй. Бер генә инфекция ауырыуын да прививка ярҙамында ғына бөтөрөп булмай (Г.П. Червонская, профессор-вирусолог, "Правда о прививках"). Шул уҡ ваҡытта прививка яһатҡандан һуң үлем осраҡтары ауырыуҙың үҙенән үлеүселәргә ҡарағанда күберәк була (академик Николай Левашов, "Прививки - оружие геноцида").Бик күп өсөнсө илдәрҙә бөтөнләй прививкалар яһалмай (медицина үҫешмәгән). Ә башҡа илдәр уларҙан үҙҙәре баш тарта, сөнки әҙләгәүҙәр көсәйә. Шулай итеп, сәсәк үҙенәнүҙе бөтә! Шулай уҡ, уларҙан бер ҡасан да, бер кем дә прививка яһатмаһа ла, ҡара һарҡау (тиф), тағын һәм башҡа инфекциялар юҡҡа сыға.

Ни өсөн шулай һуң? Әйҙәгеҙ, асыҡлайыҡ.

Теләһә ниндәй киҙеү эпидемияһы, ваҡыт үткәс, үҙенән-үҙе кәмей һәм юҡҡа сыға икәнлеге билдәле. Ни өсөн? Әгәр тирәҡта кемдер ауырый икән, кешеләрҙең аҫҡы аңы был турала белеп тора, сөнки энергомәғлүмәт алмашыныуы бар һәм организм үҙе уҡ ағыуға ҡаршы сара эшләй (организм илаһи һәм даими камиллашып тора). Тап шуның өсөн дә СССР-ҙа киҙеүгә ҡаршы вакцина эшләп тә торманылар - мәғәнә юҡ. Бер вакцина эшләгәнсе, уға заказ биргәнсе, уны күпләп сығара башлағансы, ҡулланыусыға алып барып еткергәнсе, вакциналар үткәргәнсе, вирус штаммы күптән үҙгәргән һәм мутацияланған була. Ул инде бөтөнләй икенсе төрлә һәм шуға күрә прививка яһауҙың файҙаһы юҡ.

СПИД барлыҡҡа килгәс, халыҡ ҡурҡыуға ҡалды, вирус даими мутацияланa, уға ҡаршы дарыу юҡ, кешелек тиҙҙән һәләк булырға тейеш кеүек. Ләкин һуңғы бер нисә йылда ғына СПИД менән ауырыусылар һаны 20 тапҡырҙан күберәккә кәмегән. Йәғни энергомәғлүмәт алмашыуы һөҙөмтәһендә барлыҡ кешеләрҙә лә бер ниндәй прививкаһыҙ СПИД-ҡа ҡаршы иммунитет барлыҡҡа килгән һәм был сир хәҙер юҡҡа сығып бара. Хатта СПИД бөтөнләй булмаған тип һөйләй башланылар.

Прививкаларға ҡаршы протестарға бәйле, һуңғы ваҡытта "көсһөҙләндерелгән вакцина" тәҡдим итә башланылар, йәнәһе, улар ғүмерлек. Ә бит уларға бөрәү ҙә 60-80 йыл буйы клиник һынау үткәрмәгән. Медицина докторы, бөтә донъяла билдәле ғалим Роберт Мендельсон, прививка яһаған һәм яһамаған илдәрҙә ауырыуҙар кимәле араһында бер ниндәй айырма юҡ, тип яҙа.

"Прививкалар - ҙур алдаҡ... Улар бер генә ғүмерҙе лә һаҡлап ҡалмаған, әммә бик күп ауырыуҙың һәм үлемдең, кәрәкмәгән һәм шуның өсөн дә лайыҡлы булмаған ыҙаларҙың сәбәпсеһе булды. Быны киләсәк быуындар әҙәпһеҙлек һәм хәрәфәттәр эпохаһының иң ҙур хатаһы, ә уларҙы көсләп мәжбүр итеү - иң бысраҡ тап тип таныясаҡ..." (Альфред Рассел Уоллес).

Шулай итеп, привикалар менән барыһы ла аңлашылды, әммә әлегәсә прививкалар эшләнмәһә, балаларҙы балалар баҡсаһына ла, мәктәпкә лә, бассейнға ла ҡабул итмәйҙәр. Ә 1998 йылдың 22 сентябренән "Инфекция ауырыуҙарын иммунопрофилактикалау тураһында"ғы Федераль закон ғәмәлдә. Уның 5-се статьяһына ярашлы, граждандар прививкаларҙан баш тартырға хоҡуҡлы, ә бәлиғ булмағандарға прививкаларҙы бары тик ата-әсәнең рөхсәте менән генә яһарға мөмкин (11-се статья). "Рәсәй граждандарының сәләмәтлеген һаҡлау тураһында ҡануниәт нигеҙҙәре"нең 68-се статьяһына ярашлы, медицина хеҙмәткәрҙәре сәләмәтлекте һаҡлау өлкәһендә граждандарҙың хоҡуҡтарын боҙған өсөн енәйәти, административ, дисциплинар һәм финанс яуаплылыҡҡа тарттырыла ала. Ғәҙәттә, барлыҡ мәсьәләләр ҙә баш табиптар һәм РОНО кимәлендә енел хәл ителә, ә ҡануниәтте һаҡлауҙы контроллеү менән прокуратура шөғөлләнә.

**Рауфан МОРТАЗИН.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Туҡланыу аша - камиллыҡҡа

**Диетабыҙҙы үҙгәртеп, кәрәкле туҡланыу режимын һайлап, тән формағыҙҙы, аңығыҙҙы, энергетик кимәлегеҙҙе һәм дөйөм тормош һәләтен тамырынан үҙгәртә алаһығыҙ.**

Әгәр энергиягыҙ һәм сәләмәтлегегеҙ булмаһа, быға тиклем яҙған аҡылды, тәндә, рухты камиллаштырыу стратегияларының береһе лә һеҙгә уларҙы ҡулланыуҙа, тормошҡа ашырыуҙа ярҙам итмәйәсәк. Шуға күрә артабан беҙ физик мөғжизә алырға өмөтләнеп, организмға тултырған "яғыулыҡҡа" туҡталмаҡсыбыҙ. Дөрөҫ һәм уйланылған аҙыҡ ярҙамында үҙегеҙ тураһында хәстәрлек күреп, оҙон ғүмергә һәм хыялығыҙҙы тормошҡа ашырыу һәләтенә эйә буласаҡһығыҙ. Был процессы үҙағышына ҡуйып, хыялығыҙҙы емерәсәкһегеҙ һәм уны тормошҡа ашмаҫлыҡ итәсәкһегеҙ.

Боронғо Һиндостанда кешеләр айыҡ аҡыл, рух ныҡлығы туранан-тура кешенең нисек туҡланыуына бәйле икәнлегенә ышанған. Енел, итһеҙ аҙыҡ, ябай йәшелсә-емеште йогалар һәр саҡ юғары баһалаған. Улар шәхси көс һәм энергия ағымын ит тотҡарлап тороуын тойған. Күптән түгел уҙған ғилми тикшеренеүҙәр тағы ла шуны раҫланы: аҡыл һәм тән бер-береһе менән тығыҙ бәйләнештә, әгәр береһе тейешле кимәлдә эшләмәй икән, икенсеһе ыҙалана. Шуға күрә аң менән дә, тән менән дә яҡшы мөғәмәләлә булырға кәрәк. Шул саҡта үҙегеҙ лайыҡ булған матур тормош ҡорорһоғоҙ.

**Тере аҙыҡтар менән туҡланыу: физик камиллыҡҡа ҙур аҙым!**

Гималайҙағы боронғо йогалар оҙаҡ йәшәү, физик көс, рух ныҡлығының матур өлгөһө булып тора. Уларҙың күбеһе 100-әр йыл йәшәй һәм тәнен һығылмалы, һомғол, көслө итеп ғүмер буйы һаҡлай. Аҙналар буйы йоҡламайынса, ашамайынса йәшәй алалар, көслө ауыртыуға сыҙайҙар. Уларҙың оҙайлы йәш ҡалыуының сере нимәлә? Улар, планетала оҙаҡ йәшәүселәрҙең башҡалары кеүек үк, тәбиғи диетаны һаҡлай.

"Саттвик" йәки таҙа диета тере аҙыҡ-түлеккә нигеҙләнгән. Ул ҡояштың, һауаның, ерҙең һәм һыуҙың берлегенән тыуған. "Саттвик" диетаһы яңы емеш-еләккә, уларҙан яңы ғына һығылған һуттарға, ярмаларға өҫтөнлөк бирә. Диетағыҙға шулай итеп үҙгәрештәр индереп (был супераҙыҡ диетаның 70 процентын алып торһа), һеҙ физик камиллыҡҡа һәм тулы ҡанлы тормошҡа беренсе аҙым яһайһығыҙ. Уны 30 көн дауамында тотоп ҡарағыҙ һәм алған һөҙөмтәләр һеҙҙе аптыратыр. Әгәр үле аҙыҡ (ит аҙыҡтары) урынына тере аҙыҡты даими ҡулланһағыҙ, түбәндәге һөҙөмтәгә өлгәшерһегеҙ.

- Энергия һәм организмдың ҡаршы тороу кимәле үҫер.
- Иғтибарҙы туплау һәм ижади һәләт артыр.
- Ауырлығығыҙ кәмер, билдәле кимәлдә май юғалтырһығыҙ.
- Фигурағыҙ матурланыр, тирегеҙҙең төҫө үҙгәрер, сыҙамлығығыҙ нығыныр.
- Әҙерәк йоҡлай башларһығыҙ.
- Реакцияғыҙ, аҡыл тиҙлеге артыр, хәтерегеҙ яҡшырыр.
- Ғүмер оҙайлығы үҫер, ауырыуҙарығыҙ кәмер.
- Тәбиғәт менән гармонияның яңы тойғоһон кисерерһегеҙ.
- Дөйөм хәл-торошоғоҙ яҡшырыр.

**Робин ШАРМА.**



## 30 ИЮЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Сердце Марии". Сериал
13.20 "Дневник Олимпиады"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "ЖКХ"
16.15 "Хочу знать"
17.00 "Детектор лжи"
